**✓Иғтибар! “Киске Өфө”гә яҙыла алмай ҡалған таныштарығыҙға әйтегеҙ: улар 17 февралгә тиклем яҙылһа, гәзитте марттан алдыра башлаясаҡ. Индексыбыҙ – 50665. 4 айға яҙылыу хаҡы – 158 һум 36 тин.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

3-9 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2007 ЙЫЛ

№5 (215)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күңел матурлығы...**
**ултырғыстарға күсә**



5

**Түлһеҙлеккә ни сәбәп?**



6

**Мөжәүир хәҙрәт**



7

**Ыҡтамаҡ ере...**
**ҡумыҙсыларҙы һәм өҙләүселәрҙе йыя**



11

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**
14-15

*ЙӘШӘГӘН, ТИ, ШӘХЕСТӘР...*

# Өҙөлгән моң



**1976 йылда йәйге отпуск ваҡытында "Баймаҡ" ял йортонда ял иткәндә концертта ҡатнаштым. Шунда өлкән йәштәрҙәге бер ағай (Әбйәлил районынанмын, тигәйне, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, исем-шәрифен һорарға башым етмәгән) атайәсәйем тураһында һорашты. Әсәйем Баймаҡ районының Темәс ауылынан, тигәйнем, ҡыҙ фамилияһын һораны. Исҡужина, тигәйнем, Әбдрәхим Исҡужин тураһында ишеткәнең юҡмы, тине. Әсәйем уның исемен йыш телгә ала, данлыҡлы йыраусы булған, 30-сы йылдарҙа "халыҡ дошманы" тип, ҡулға алғандар, шунан әйләнеп ҡайта алмаған, тигәйнем, ағайҙың күҙҙәрендә йәштәр ялтыраны. "Уның Темәстә йырлағаны күрше ауылдарҙа ишетелә торғайны, ундай ҙа йыраусыны бүтән күргәнем дә, ишеткәнем дә булманы, булмаҫ та инде, ниндәй кешене әрәм иттеләр", - тине ул ауыр көрһөнөп.**

Баймаҡ ҡалаһы һәм районы ветерандары "Атайсал" ойошмаһының район үҙәк китапханаһы ярҙамында сығарылған "Күк Ирәндек" тип аталған гәзит-плакатта Әбдрәхим Исҡужин тураһында, авторы хәҙер инде мәрхүм тарихсы Ирек Хөсәйенов, түбәндәгеләр яҙылған: "Темәс ауылында тыуып үҫкән йырсы һәм ҡурайсы Әбдрәхим Исҡужинды оло быуын кешеләре әле лә хәтерләй. Ысынлап та, Әбдрәхим Рәхмәтулла улы ифрат данлыҡлы йырсы була. Ул йырлаған саҡта тауышы бер йәйләүҙән икенсе йәйләүгә ишетелеп торған, моңло итеп аҙан әйткәндә халыҡтың күҙҙәренән йәштәр сыҡҡан, тип һөйләйҙәр.

Әбдрәхим Исҡужин башҡорт халҡының бөтә йырҙарын да оҫта башҡарған, һәр йырҙың тарихын ентекләп өйрәнгән, шул уҡ ваҡытта ҡурайҙа ла оҫта уйнай белгән. Бына шуға күрә лә 1923 йылда Мәскәүҙә Рәсәй халыҡтары этнографик күргәҙмәһе (Бөтә Союз кустар сәнәғәт һәм ауыл хужалығы күргәҙмәһе - **Ю.F**) үткәрелер булғас, Башҡортостан делегацияһы етәксеһе Әбүбәкер Хөсәйенов уны баш ҡалаға йырсы сифатында алып бара. Мәскәүҙә Әбдрәхимдең моңло башҡорт йырҙарын хөкүмәт етәкселәре, башҡорт тирмәһен күрергә килеүселәр йотлоғоп тыңлай, күптәр хайран ҡала.

Мәскәүҙән ҡайтҡас, Әбдрәхим Исҡужинды Башҡорт академия драма театрына артист итеп эшкә алалар. Бында уның таланты артабан үҫә, ул театрҙа эшләгән күренекле артистар, ҡурайсылар менән берлектә Башҡортостан буйлап гастролдәрҙә йөрөй, хеҙмәтсәндәргә моңло халыҡ йырҙарын йырлап ишеттерә.

1927 йылда Мәскәүҙә үткәрелгән театрҙар декадаһында Башҡорт академия драма театры коллективы составында ҡатнаша, Хәбибулла Ғәбитовтың "Ынйыҡай һәм Юлдыҡай" пьесаһында йырсы ролен башҡара.

30-сы йылдар башында илдә һәр төрлө ялған ғәйептәр табып, күп кенә кешеләрҙе ҡулға алыу башлана, бигерәк тә хәлле крәҫтиәндәр дин юлынан барғандар репрессия ҡорбанына әйләнә. Әбдрәхим йырсының атаһы Рәхмәтулла хәлле дин әһеле була, үҙе лә уҡымышлы динселәр иҫәбенә инә. Шуның өсөн Әбдрәхим театрҙан эштән сығарыла.

Тыуған яҡтарына ҡайтҡас, данлыҡлы йырсы Түбә рудниғына забойщик булып эшкә төшә. Ләкин бында ла уны тыныс ҡалдырмайҙар, өҫтөнән ошаҡ яҙалар. Ул ҡулға алына һәм төрмәгә ябыла. Бер нисә йыл тотҡонлоҡта булғандан һуң ул тыуған яғына ҡайтып эшләй башлай. Ләкин яңы репрессиялар осоро башлана, яла яғыусылар, ошаҡсылар икенсе мәртәбә Әбдрәхим өҫтөнән НКВД органдарына яҙа башлай.

**(Дауамы 12-се биттә).**

**✓ Минең милләтемдәге ошондай матур сифатты - күңел киңлеген күреп, баһалап, бар республикаға яңғыратып әйтеп торған был урыҫ кешеһенә рәхмәттәр яуҙырҙым. Әйе, беҙ үҙебеҙ был күңел киңлеген шәйләмәйбеҙ ҙә.**



ҺАБАҠТАР

# Ҡунаҡсыллыҡ шулай, ирлек шулай

Студент йылдарында стипендияны осон-оска ялғап саҡ еткерә торғайныҡ. Бер көндө кис бүлмәбеҙгә Әзербайжан егете Аскеров Фирудин килеп инде лә: "Сәй эсерәһеңме? Һыуһаты", - тине. Ул - дүртенсе курста, мин - беренселә генә уҡыйым. Бынан бер көн алда институтта туҡтатып, ҡайҙан килеүемде, милләтемде һорашып торғайны. Мосолман ҡыҙы булыуым йөҙөмдән үк күренеп торғанға ҡыҙыҡһынғандыр инде. "Сәй-шәкәр бар ҙа ул. Бер-ике көндән стипендия бирәләр, әлегә коро сәй генә эсерә алам", - тинем уңайһыҙланып ҡына. "Ярай, сәйеңде күя тор, мин хәҙер", - тип, ул үҙҙәре йәшәгән бүлмәгә ҡайтып килде. Ҡулында - картуф, көнбағыш майы. Картуфты, күрәһең, баҙарҙағы якташтарынан һатып алғандыр инде - улары, алма кеүек, тип-тигеҙ, түп-түңәрәктәр. Картуф ҡабығын йоҡа ғына итеп әрсеүемде күреп: "Һинән бик һәйбәт хужабикә сыға, ҡулдарың килешле ҡуҙғала", - тип, ихлас маҡтаны. Әрсеп бөтөргәс: "Бар, өҫтәл әҙерләй тор, бешереүен мин бешерәйем. Мин бешерергә яратам", - тип кухняла тороп ҡалды. Ун-ун биш минуттан Әзербайжан йырын йырлап, ҡыҙҙырылған картуфтың тәмле еҫен аңҡытып, бүлмәгә килеп инде. Беҙ, бүлмәләш ҡыҙҙар, уға ҡарап, шаҡ ҡаттыҡ. Фирудин картуфты бер-ике ҡапҡыланы ла, йомошо барлығына һылтанып, үҙ бүлмәһенә ҡайтып китте. Күрәһең, ул бары тик беҙҙе һыйларға ғына уйлағандыр.

Стипендия бөткән саҡта ағайыбыҙ йыш ҡына шулай "сәй эсергә" килә торғайны. Ә инде тыуған яғынан посылка килһә, үҙе ҡунаҡҡа саҡыра һала. Йылы яҡтан килгән гранат, йөҙөм, алмалар бик тә тәмле ине - ояла-ояла ғына ауыҙ итәбеҙ. Фирудин бер көн уйынлы-ысынлы итеп: "Мин һине Әзербайжанға алып ҡайтам", - тип тә ысҡындырҙы. "Ағай, минең Башҡортостан тигән гүзәл илем бар, һеҙҙә мин тыуған яғымды һағынырмын бит", - тип яуапланым. Бер йылдан ул уҡыуын тамамлап, тыуған яғына ҡайтып китте. Тиҙҙән архитектура институтында уҡытыуы, ғаилә ҡороуы, фатир алыуы тураһында хат яҙып ебәрҙе. Шул ваҡиғаларға ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт үткән, ә әзербайжан егетенең игелеге һаман иҫтән сыҡмай.

Шулай бер көн Фирудин беҙҙә "сәй эскән" саҡта бер егет беҙҙән үтескә акса һорап инде. Ағайыбыҙҙың күҙҙәре түп-түңәрәк булды. Ул, ярһыуын көскә тыйып, тыныс тауыш менән: "Минең илемдә, ғөмүмән, мосолман илдәрендә, ир-егетмен тигән кешегә ҡатын-ҡыҙҙан акса һорау иң ҙур оятһыҙлыҡ һанала! Быны һин бер ваҡытта ла онотма, башҡа студенттарға ла еткер", - тине. Фирудиндың был ҡылығы ла оло һабаҡ булды.

**Айгөл АХУНОВА.**

ТУҒАНЫМ...

# ҠАЛАЙ БИҘӘЙ БЕҘҘЕ

## күңел йомартлығы

**Гәзиттә "Туғаным..." тигән рубрика ойоштороп, һәйбәт иттегеҙ әле. Үҙеңдә, үҙ туғандарыңда, үҙ милләтеңдә булған яҡшы сифаттарҙы таныу өсөн башҡалар менән сағыштырыу, йә булмаһа, кемдеңдер был хаҡта әйтеүе кәрәк шул. Юҡһа, "Башҡорт башҡортто ашай" тигәндә бер ләкап итеп алдылар ҙа, сәйнәйҙәр ҙә сәйнәйҙәр шуны. Беҙҙең халыҡ бигерәк ғәжәл бит ул. Икейөҙләнә, берҙе уйлап, икенсене һөйләй белмәй. Бәлки шул арҡала барлыҡҡа килгәндер әлеге йәмһеҙ хәбәр: "Башҡорт башҡортто...". Тьфү, тел әйләнмәй хатта.**

Бер дауаханала баш табип булып минең дуҫым эшләй ине. Төрлө милләт кешеләренән торған коллективта бер нисә генә башҡорт эшләгәнен белә инем. Бер башҡорт егете менән дуҫым айырыуса ғорурлана торғайны һәм әйләнгән һайын ошолай тиер ине: "Яҡшы хирург, бөтөн ауырыуҙар операцияны унан яһатырға һорай, аяҡтан йығылғансы эшләй. Етмәһә, фән менән дә шөғөлләнә. Уны үҙемдең ҡустым һымаҡ күрәм". Ә икенсе бер милләттәш ҡатын үҙенең эшкә илке-һалҡылығы, яуапһыҙлығы менән баш табиптың да, коллективтың да түҙемлеген оҙаҡ һынаны. Дуҫым байтаҡ түҙҙе, шунан уны эштән ҡыуырға мәжбүр булды. Бына шул ваҡытта мин ул ҡатын ауыҙынан "Башҡорт башҡортто ашай инде ул", тигән һүҙҙәрҙе ишеткәйнем.

Бына ошондай ысынында милләте абруйын уйлап та бирмәгән, кәрәк саҡта ғына милләт артына йәшеренергә тырышҡан әҙәмдәр уйлап сығара инде ул әлеге хәбәрҙәрҙе лә. Үҙенең йүнһеҙлеген шулай аҡламаҡсылар. Быуна шуныһы йәндә көйҙөрә лә: үҙ мәхлүклеген, үҙенең кәмлеген, үҙенең булдыҡһыҙлығын бөтән милләткә япһара ҡайһы берәүҙәр. Быуна ошолар хаҡында күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшер мөмкинлек бирә "Киске Өфө" гәзите. Уйланырға мәжбүр итә. Быуна бит, "Киске Өфө"лә, "Беҙҙең халыҡта туғанлыҡ тойғоһо башҡаларға ҡарағанда ла көслөрәк ул", тигән һүҙҙәрҙе уҡымаһам, был хаҡта уйланмаҫ инем әле. Уйланып йөрөнөм-йөрөнөм дә, ҡулыма ҡәләм алдым хатта.

Был хатты яҙырға тағы бер ваҡиға сәбәпсе булды. Бер көндө телевизорҙан бер урыҫ шулай тип һөйләп тора: "Йүрүҙән буйлап һалда ағып төштөк тә, Салауат районында бер башҡорт ауылында туҡтаныҡ. Маҡсатыбыҙ- башҡорт балы һатып алыу. Бер йортҡа индек. Хужа асыҡ йылмайып ҡаршы алды, йомошобоҙҙо тыңланы ла:"Әйҙәгеҙ, улайһа, балды ағыҙырға ғына тора инем. Күҙ алдығыҙҙа ағыҙып бирәм",- тине. Беҙ был тәҡдимгә шул тиклем шатландыҡ: умартасының шөғөлөн күҙәтеү мөмкинлеге лә була, яңы ғына ағыҙылған баллы ла булабыҙ. Һәр беребеҙ хужаға һауыттарыбыҙҙы тотторҙоҡ та, күңелле тамашаны ҡыҙыҡһынып күҙәтәбеҙ. Күпмелер ағыҙғандан һуң, ҡайһы бер һауыттар буш ҡалыуға ҡарамаҫтан, хужа бал ағыҙыуҙан туҡтаны һәм беҙгә ҡарап:"Ярай, етеп торор", - тине. "Бөттөмө ни?"тибеҙ тулҡынланып. "Бөтмәне, ана, күршеләрҙең дә умарталығы бар, уларҙың да акса эшләгеһе килә. Һатып алыусыларҙы улар ҙа көтә, барығыҙ, күршеләремә лә инеп сығығыҙ", тине был. Быуна ҡайҙа башҡорт кешеһенең күңел йомартлығы!"

Минең милләтемдәге ошондай матур сифатты - күңел киңлеген күреп, баһалап, бар республикаға яңғыратып әйтеп торған был урыҫ кешеһенә рәхмәттәр яуҙырҙым. Әйе, беҙ үҙебеҙ был күңел киңлеген шәйләмәйбеҙ ҙә. Уны шулай тейеш тип ҡабул итәбеҙ. Сөнки ҡиң күңеллелек беҙҙең ҡаныбыҙҙа. Быуна, мәҫәлән, баҙарҙа емеш һатып торған башҡорт апайҙарының: "Ярай, әйҙә, күршемдекен дә ал, уға ла ҡыйын булмаһын", - тигәненә һәр саҡ шаһит булам мин. Быға аптырамайым да, сөнки ул шулай булырға тейешле яҙылмаған ҡанун, ғәҙәт. Ә быуна ошоға ҡапма-ҡаршы икенсе бер күренеш мине хайран иткәйне: сәфәрҙән ҡайтышлай бер ауыл тәңгәлендә һөт, ҡаймаҡ һатҡан бала-саға эргәһендә машинабыҙҙы туҡтаттыҡ. Ҡыйыуһыҙ ғына бер ситтә баҫып торған ун йәштәрҙәге малай эргәһенә килеп, ҡаймағын алырға итһәм, барыһының да уртаһында баҫып торған өлкән йәштәрҙәге ҡатын:"Ҡуй, алма шул малайҙың ҡаймағын, бысраҡ тотона уның әсәһе", - тип ҡысҡырҙы. Уның ҡотҡоһона бирелә яҙып, икенсе яҡҡа тайшанайым тиһәм, әлеге малайҙың мөлдөрәп торған күҙҙәре менән осраштым. Оят булып китте. Моғайын, был бала ошо һөт аҡсаһына бик ныҡ мохтаждыр, тигән уй килде шунда башыма һәм ул малай һатҡан ҡаймаҡты ла, һөттө, йомортҡаны ла һатып алып киттем. Ә теге ҡатын мине әрләп тороп ҡалды. Әл дә минең милләттәштәрем түгел, тип шатландым һуңынан.

**Сәриә ЙОМАҒУЖИНА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# БАТЫР БУЛЫП ТЫУМАЙҘАР...

Төрөк - Рус һуғышында уңыштары менән дан ҡаҙанған Александр Васильевич Суворов (граф Рымминский) Рәсәй тарихында талантлы полководец, генералиссимус булараҡ билдәле. Ул заманында "Полковое Учреждение", "Наука побеждать" тигән хәрби-теоретик китаптар яҙа.

Рымминский йылғаһы янында барған һуғыштар ваҡытында хәрби хеҙмәткә яңы ғына алынған йәш һалдат Кузьма Шапкин ҡурҡышынан көнө буйы ҡыуаҡ араһында ултыра. Александр Васильевичтың үҙен күҙәтеүен һиҙмәй.

Шул алышта төрөктәрҙе еңеү уңайы менән Суворов армияһына орден һәм миҙалдар алып киләләр. Офицерҙар полк һәм роталарҙы теҙеп ҡуя. Яугирҙар янына Суворов килә һәм наградаларҙы тарата башлай. Шапкин тантананың тиҙерәк бөтөүен теләп, шым ғына баҫып тора. Һәм... Ни ҡолағы менән ишетһен, Суворов уның фамилияһын ҡысҡыра:

- Гренадер Шапкин!

Һалдаттың табандары ергә йәбешкән кеүек була ла ҡуя.

- Гренадер Шапкин, килегеҙ бында! - тип ҡабатлай Суворов.

Шапкин ояйлышынан ҡып-ҡыҙыл булып, полководец янына барып баҫа, ә тегеһе быныһ түшенә миҙал таға.

Кискеһен һалдаттарға араҡы тараталар. Улар палаткалар янында теҙелешеп ултырып, хәтирәләргә бирелә. Бүләкләнеүселәр орден йә миҙал алырлыҡ батырлығын иҫенә төшөрә.

- Һин дә һөйлә әле, - тиҙәр Шапкинға, - ни өсөн бирелде һиңә миҙал?

Нимә тиһен йәш һалдат, өндәшмәй. Бер аҙна тирәһе ыҙалана Шапкин. Намыҫы тынғылыҡ бирмәй. Тота ла Суворовтың палаткаһына барып инеп, миҙалды кире һона.

- Юҡ, юҡ, - тип ҡаршылаша Суворов, - ал наградаңды!

Шапкин башын әйеп баҫып тора ла, ни булһа ла булыр, тип, үҙенең хәрби бүләккә лайыҡ түгел икәнен һөйләп бирә.

- Молодец! - тип арҡаһынан ҡаға Суворов һалдаттың. - Беләм мин уны, беләм. Һынап ҡарайым тигәйнем, намыҫлы һалдат икәнһең. Белеп ҡуй: батыр булып тыумайҙар. Батырлыҡ эшләп батыр була кеше. Ярар, миҙал миндә ятып торһон. Лайыҡ булыу менән кире алырһың да түшеңә тағып йөрөрһөң.

Шулай булып сыға ла. Икенсе алышта уҡ Шапкин тәүгеләрҙән булып төрөк ныҒытмаһына бәреп инә һәм үҙенең теге миҙалын яулап ала.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Ф. Рәхимов опекундарҙың (попечителдәрҙең), тәрбиәгә алған һәм патронат ғаиләләрҙең республика конкурсы тураһында Указ ҡабул итте. Етемдәрҙе һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы урынлаштырыуҙың ғаилә формаларын үҫтереүгә этәргес биреү, иң яҡшы опекундарҙы, тәрбиәгә алған һәм патронат ғаиләләрҙе матди дәртләндереү маҡсатын күҙ уңында тотҡан был документ буйынса конкурста еңеүсе өс ғаиләгә Башҡортостан Республикаһы Президентының 100-әр мең һумлыҡ өс премияһы тапшырыласаҡ.

✓Республика йортонда Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ф. Рәхимов Президент Советының сираттағы ултырышын үткәрҙе. Унда былтырғы Тәҙеҡләндереү йылы йомғаҡтары тикшерелде һәм Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығы йылында атҡарыласаҡ саралар планы ҡаралды.

✓Бөтә Рәсәй "Тирә-яҡ мөхит сифаты менән идара итеүгә комплекслы ҡараш" тигән ике көнлөк кәңәшмә үтте. Уның эшендә Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Рәхимов, башҡа вазифалы кешеләр, шулай уҡ РФ Дәүләт Думаһының Экология буйынса комитеты рәйесе В. Грачев ҡатнашты.

✓20 февралдән 6 мартҡа тиклем Башҡортостанда Рәсәй уҡыусыларының ҡышҡы спартакиадаһы сиктәрендә ике төр саңғы ярыштары һәм саңғыла трамплиндан һикереү буйынса ярыштар буласаҡ. Өфө 130-ҙан ашыу спортсыны ҡабул итәсәк.

✓22-25 февралдә Күмертау ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы Президенты һәм БР Хөкүмәте Премьер-министры призДарына XIV Саңғы спорты фестивале үтәсәк.

✓Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы студенттары Хоҡуҡ үҙәге булдырҙы. Унда йәш юристар мәктәп уҡыусыларына һәм ҡала халҡына хоҡуҡи ярҙам күрһәтә, консультациялар бирә.

✓Баш ҡаланың ике майҙанында БР Федераль һалым хеҙмәте идаралығына етәксе итеп БР Президентының ризалығын алмайынса Айнур Әйҙелдиновтың ҡуйылыуына ҡаршы пикеттар үтте. Унда ҡатнашыусылар шулай уҡ РФ субъекттары араһында бюджетара мөнәсәбәттәрҙе ҡайтанан ҡарауҙы ла талап итте.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Владимирович Путин сираттағы тапҡыр журналистар менән осрашты. Уның был ғәҙәтенә өйрәнеп бөтөлгән инде. Йыл да осраша ул ваҡытлы матбуғат саралары вәкилдәре менән. Оҙаҡ ҡына ултыра бит инде Владимир Владимирович илебеҙҙең иң юғары урынында, ете йыл тулды. Әммә уның менән күҙгә-күҙ ҡарашып һорау биреп, яуаптарын ишетергә теләүселәрҙең һаны кәмемәй. Арта ғына. Быйыл Путин менән осрашыуға 1232 журналист килде. Был уның элегерәк үткәрелгән матбуғат конференцияларынан байтаҡҡа күберәк. Ғөмүмән, был йәһәттән Путин йыл һайын яңынан-яңы рекорд ҡуя. 2006 йылда, мәҫәлән, осрашыу 3 сәғәт 26 минут дауам итһә, быйыл журналистар менән аралашыу 3 сәғәт 32 минут дауам итте. Был ваҡыт эсендә Владимир Владимирович 65 журналистың 69 һорауына яуап бирҙе.**

# Мин идара итмәйем, ә эшләйем!

## Шулай тине В. Путин 1 февралдә үткән матбуғат конференцияһында

**Б**ыйыл Путинға һорауҙарҙы күберәк үҙебеҙҙең журналистар бирҙе. Сит ил вәкилдәренең ни бары 16-һына ғына Президент менән аралашыу бәхете эләкте. Был инде Президентыбыҙҙың матбуғат сәркәтибенең эше. Ул кемгә мөмкинлек бирә, шул донъяның иң ҙур дәүләттәренең бере булған Рәсәйҙең етәксеһе менән аралаша.

Тағы ла бер үҙенсәлек - Путинға йышыраҡ ил эсендәге хәлдәр тураһына һөйләргә тура килде. Иң мөһим һәм йыш ҡабатланған һорауҙарҙың береһе: "2008 йылдан һуң Рәсәй менән ни булыр һәм Путин үҙенең урынына кемде ҡалдырыр?" Ғөмүмән, Президентыбыҙҙы йышыраҡ тыңларға кәрәк, тигән фекергә килдем мин. Ул хатта быға тиклем күп тапҡыр ҡабатланған мәғлүмәттәрҙе лә, нисектер, ышаныслы, өмөтлө тауыш менән еткерә ала. Кемде нисектер, әммә мине уның илдәге ситуация тураһындағы информацияһы ҡыуандырҙы ғына. 2006 йылда эш хаҡы - 13, халыҡ килемдәре - 10, пенсиялар 5,4 процентҡа артҡан. Милли проекттар уңышлы тормошҡа ашырыла - мәғарифта эш хаҡы 30, ә һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә хатта 37 процентҡа күбәйгән. Бер йыл эсендә күпкә булмаһа ла, халыҡтың үлеме кәмегән, саҡ ҡына тыуым артҡан. Шул уҡ ваҡытта Путин киләсәккә иң мөһим бурыстарҙы билдәләп ҡуйҙы. Байҙар һәм ярлылар араһындағы айырмалыҡты ҡыҫҡартырға кәрәк, тине ул. Был һүҙҙәрен мин бер тапҡыр ишеткәйнем инде. Былтыр булды ул. Тимәк, был эш артабан да дауам итәсәк. Йәғни, бер йыл эсендә генә байҙарҙан тартып алып ярлыларға таратып биреп булмай, тип һығымта яһаны Президент.

**Т**ағы ла бер өлкәләге уңыштар тураһында Путин айырым билдәләп үтте. Ул да булһа, элекке СССР-ҙың бурыстарын биреү. Үткән йылда Рәсәй сит илдәргә булған 22 миллиард доллар күләмендә бурыстарҙы ҡаплаған. Путин маһайыңҡырап, Рәсәй үҙе өсөн генә түгел, элекке Союздың башҡа республикалары өсөн дә түләгәнен әйтеп үтте. Башҡаларға бурыстарҙы биреп бөттөк, хәҙер үҙ халҡыбыҙ менән иҫәпләшә башлаясаҡбыҙ, тигәнде аңлата инде был. Тормоштоң яҡшырыуына өмөт бар былай булғас.

Журналистарҙы ҡыҙыҡһындырған икенсе бер мөһим мәсьәлә - Рәсәй менән Белоруссия араһындағы мөнәсәбәттәр һәм ошо ике ил ҡатнашлығында төҙөлә башлаған союздаш дәүләт проектының киләсәге. 2007 йылдың башында Рәсәй менән Беларусь газ һәм торба үткәргесе арҡаһында килеп сыҡҡан ыҙғыш сәбәпсе булғандыр быға. Путиндың яуабы бөтәһен дә ҡәнәғәтләндергәндер, моғайын. Союздаш дәүләтте төҙөүҙе дауам итәсәкбеҙ, ике илдең уртаҡ аҡса берәмеге барыбер буласаҡ, Рәсәй валютаһымы, әллә Беларусь һумымы, уныһы әлегә билдәһеҙ.

**Р**әсәйҙең энергетика сәйәсәте сит ил журналистарын күберәк ҡыҙыҡһындырҙы. Һәм был аңлашыла ла. Уларға бит беҙҙән газ һәм нефть бара. Теләһәк, бирмәйбеҙ. Теләһәк, хаҡты арттырабыҙ. Беҙ үҙ өҫтөбөҙгә алған бурыстарыбыҙҙы тулы кимәлдә артабан да үтәйәсәкбеҙ, тине был йәһәттән Путин, тик беҙ башҡа илдәрҙең ҡаҙналарын тултырырға тейеш түгелбеҙ. Ысынлап та, үҙебеҙгә етмәгән аҡсаны башҡаларға тоторан ни мәғәнә?

Милли мәсьәләләр матбуғат конференцияһы барышында бер нисә тапҡыр күтәрелде. Рәсәйҙә баш күтәргән урыҫ милләтселегә, ксенофобия (башҡа милләт кешеләрен күрә алмаусынлыҡ), фашизм күптәрҙе борсой. Путинды шул иҫәптән. Был кире күренештәрҙең сәбәбе Рәсәйҙең төп милли төркөмө вәкилдәрендә (тимәк, урыҫтарҙа) СССР тарҡалғандан һуң тыуған кәмһенеү тойғоларында барлыҡҡа килгән идеологик бушлыҡтан, тип аңлатты беҙгә Президент. Әлбиттә, беҙ был күренештәр менән көрәшәсәкбеҙ, тине Путин, әммә беҙгә ваҡытлы матбуғат сараларының, йәмәғәтселектең ярҙамы кәрәк. Шунда уҡ күҙ алдына килтерҙем - урамда йәш фашистар берәй үзбәкте, йәки грузинды туҡмай икән, милицияға түгел, ижтимағи ойошмаларға һәм журналистарға йүгерергә кәрәк. Улар мотлаҡ ярҙам итәсәк. Ә, бәлки, тәүҙә дәүләт тарафынан милләтселек һәм фашизм сағылыштарына юл бирмәү тураһында яҙылған закондарҙы теүәл һәм ваҡытында үтәү мотлаҡтыр. Беҙҙә бит һуңғы ваҡытта (кемдеңдер ҡушыуы менәнме, әллә үҙ белдектәре менәнме) милиция хеҙмәткәрҙәре бөтә ошондай енәйәттәрҙе хулиганлыҡҡа ауҙара ла ҡуя. Әйткәндәй, урыҫ фашизмы айырыуса Санкт-Петербургта, йәғни Владимир Путиндың тыуған ҡалаһында киң таралған.

**И**потека мәсьәләһе лә борсоно журналистарҙы. Улар ҙа бит беҙҙең кеүек үк ябай кешеләр, тимәк, торлаҡтарын яңыртҡылары, яҡшыртҡылары килә. Әйе, ипотека әлегә ҡыйбат, тип белдерҙе Президент. Әммә бер нисә йыл элек ул тағы ла ҡыйбатыраҡ ине. Тимәк, хәлдәр яҡшырыуға табан бара. Бөгөн инфляция йылына 9 процент кимәлендә, ә ипотека 11 проценттан ашып китә. Уны арзанайтыр өсөн иҡтисадты көсәйтергә һәм инфляцияны туҡтатырға кәрәк. Хаҡтарҙың артыуы йылына 4-5 проценттан артмаһа, ипотека ла арзанаясаҡ, тине ул. Путиндың был һүҙҙәре мине ҡыуандырҙы. Тик... Беҙҙең илдә бит кешесә түгел. Яғыулыҡ менән шул уҡ хәл килеп сыға ла инде. Донъяла нефткә хаҡтар артҡан һайын, бензин ҡыйбатлана бара. Был хәл менән килешергә мөмкин. Әммә, нишләптер, башҡа илдәрҙә яғыулыҡ арзаная башлаһа, беҙҙә уның хаҡы арта. Нишләп? Кем ғәйепле? Төпкәрәк төшһәң, был мәсьәлә лә еңел генә сиселә. Рәсәйҙең нефть компаниялары яғыулыҡҡа хаҡтар төшөүе сәбәпле юғалтҡан килемдәрен кемдән йыйып ала? Дөрөҫ! Беҙҙән. Торлаҡ менән дә шул уҡ хәл килеп сыҡһа, нишләрбеҙ? Әлегә бит "Торлаҡ" милли проектын иғлан итеүгә ҡарамаҫтан, фатирҙар арзанаймай. Үткән йыл эсендә генә 80-90-100 процентҡа артты. Йәл, Путиндан был хаҡта берәү ҙә һораманы.

**У**ның ҡарауы, 2008 йыл хаҡында һорауҙар күп булды. Путин, үҙемдең урыныма берәүҙе лә ҡалдырмайым, Президент һайлауҙары ирекле демократик шарттарҙа үтергә тейеш, тип белдерҙе. Шунда уҡ Архангельскиҙан "Правда Севера"гәзите журналисы Дарья Емельянова был ҡалала булған бер ваҡиға айҡанлы һорау бирҙе. Баҡтиһәң, Архангельскиҙың мэры Рәсәй президенты посына кандидатураһын күрһәтеү тураһында иғлан иткән икән. Үҙенең буласаҡ эш программаһы хаҡында Мәскәүҙә үткәрелгән матбуғат конференцияһында һөйләгән. Тик ҡала башлығына урында тынғылыҡ юҡ. Уны көн һайын тиерлек прокуратураға саҡырта башлағандар, булған документтарын, хатта мәктәптә бирелгән аттестатын тикшерәләр, имеш. Путин быға яуап итеп, "Президент булып алһа, уларҙың ҡолаҡтарын борор әле", тип шаярып та алды. Владимир Владимирович фекеренсә, был хәл Архангельск ҡала башлығының президент посына дәғүә итеүе менән бер нисек тә бәйле түгел. Ул, күрәһең, өлкә етәкселеге менән эшлекле мөнәсәбәттәр урынлаштыра алмай, тип һығымта яһаны Путин.

Һорауҙар күп булды. Әммә Президентыбыҙҙың өс сәғәттән ашыу дауам иткән әңгәмәһе һиҙелмәй ҙә үтте лә китте. Дөйөм алғанда, Путиндың был матбуғат конференцияһынан журналистар күп нәмәне көткәйне. Билдәле булыуынса, киләһе йыл беҙ Рәсәй президентын һайлаясаҡбыҙ. Владимир Путин ике тапҡыр был вазифаны биләне, тимәк, Конституцияға ярашлы, ул өсөнсө осорға бер нисек тә бара алмай. Тимәк, ул үҙенең урынына кемделер ҡалдырырға, булған мөмкинлектән файҙаланып, буласаҡ етәксегә үҙенең сәйәси "васыятын" иғлан итергә тейеш бит. Әммә быының урынына беҙ сәйәси тотороҡлолоҡ, властың бөтә тармаҡтарының бергә егелеп эшләргә тейешлеге хаҡында ишеттек. Тотороҡлолоҡ шәп нәмә ул. Һуңғы йылдарҙа беҙ был нәмәне ныҡ һағындыҡ. Хатта Брежневты йышыраҡ иҫкә төшөрә башланыҡ. Ул хәл тора-бара торғонлоҡҡа әйләнеп китмәһен ине.

**Таһир ИШКИНИН.**

*УРА! УРА!*

# Тәмәкесенән...

## гүзәл заттар ҡаса

**Әйе, "Ура" ҡысҡырырға була: 1 ғинуарҙан тәмәкене рекламалаусы тышҡы рекламалар тыйылды. Бер мәлгә баш ҡалалағы ул рекламалар урынлашҡан таҡталар бушап ҡалды. Шул буш урындарға һәр кемдең күңеленә май булып яғылырҙай изге һүҙҙәр, йә афоризмдар, йә булмаһа, ниндәйҙер иҫкәртеүҙәр яҙғы килә лә бит...**

Әйткәндәй, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың күптән түгелге ултырышында тәмәкегә ҡаршы көрәш тураһындағы Закон авторы, депутат Венер Ғәзиз улы Сәхәүетдинов бик ҡыҙыҡ тәкдим индерҙе. Ул тәмәке рекламаһынан бушаған таҡталарға түбәндәге һүҙҙәрҙе яҙып ҡуйырға тәкдим итте:

***- Тәмәке тартҡан кешенең йортона ҡараҡ төшмәй, сөнки ул төтөнгә быулығып, йүткереп, төнө буйы йоҡламай сыға.***

***- Тәмәке тартҡан кешене эт тешләмәй, сөнки никотин йотоу һөҙөмтәһендә уның аяҡтары ауырта һәм ул таяҡ менән йөрөй.***

***- Тәмәке тартҡан кеше мәңге йәш була, сөнки ул ҡартлығына барып етә алмай донъя ҡуя.***

***- Тәмәке тартҡан кешенән гүзәл заттар ҡаса, сөнки ул - импотент.***

Ысынлап та, әле генә тәмәке рекламаһынан бушаған таҡталарға ошо һүҙҙәрҙе яҙып элгәндә, кемдер уйланыр ине ул. Әммә... Был - хыял ғына. Ана бит, депутаттар ҙа был һүҙҙәрҙе уйынға алды һәм рәхәтләнеп көлөүҙән ары китмәне.

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты "Сен-Гобен" француз концерны вәкилдәре менән осрашты һәм республикала гипсокартон етештереү буйынса завод төҙөү перспективалары тураһында һөйләште. Был халыҡ-ара концерн Францияла 1665 йылда уҡ барлыҡҡа килгән. Бөгөн 51 илдә уның 1300 компанияһы урынлашҡан. Йыллыҡ килеме 40 миллиард доллар тәшкил итә.

✓Быйыл 10-11 октябрҙә Өфөлә билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты үтәсәк. Ошо ваҡиға айҡанлы һәм милли көрәш спорт төрөн үҫтереү перспективаларына арналған кәңәшмә булып үтте. Уны БР Президенты Хакимиәте етәксеһе Радий Хәбиров алып барҙы. Унда шулай уҡ БР Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты. Билдәләнеләүенсә, милли көрәш башҡа профессиональ спорт төрҙәре араһында үҙенең лайыҡлы урынын алырға тейеш. Быының өсөн кадрҙар һәм матди-техник йыһазландырыу мәсьәләләрен кисекмәҫтән хәл итеү талап ителә. Өфөлә Көрәш буйынса үҙәк төҙөү ҙә маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

✓"Ағиҙел" электр ҡырынғысы һаман да ҙур һорау менән файҙалана. Быйыл Өфө төҙөлөш приборҙары эшләү берекмәһендә 360 мең ҡырынғыс етештерергә иҫәп тоталар.

Былтыр ғинуар-ноябрҙә республиканың һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә уртаса айлыҡ эш хаҡы 5969 һум (2005 йыл менән сағыштырғанда 34 проценҡа күберәк), ә мәғариф өлкәһендә 4958 һум (25 процентҡа күберәк) тәшкил иткән.

✓13-15 февралдә "Башҡортостан" Күргәҙмәләр комплексының 1-се павильонында "ӨфөПромЭкспо - 2007" ҡала күргәҙмәһе үтәсәк. Уның төп маҡсаты - баш ҡала иҡтисады ҡаҙаныштарын күрһәтеү.

✓Башҡортостан делегацияһы Берлинда үткән "Йәшел аҙна" халыҡ-ара күргәҙмәһендә ҡатнашты. Башҡорт балы, йәғни "Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы Гран-приға лайыҡ булды: алтын миҙал һәм тағы бер махсус миҙал - "Йәшел аҙна" символы менән бүләкләнде. Үҙәк Германия предприятиелары менән йылына 500 тонна бал, прополис ҡушып яһалған шыйыҡ һабын, бал өсөн быяла һауыттар ебәреү тураһында килешеү төҙөнө.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты "Башҡортостан Республикаһының дәүләт ихтыяждары өсөн ер участкаларын резервлау тураһында" Указ ҡабул итте.

ИРҘӘР ҠОЛАҒЫНА

**Һуңғы 50 йылда ир-егеттәр араһындағы түлһеҙлек ике тапҡырға артҡан. Быға ниндәй сәбәптәр йоғонто яһаған һуң?**

# Түлһеҙлеккә ни сәбәп?

### Кеҫә телефоны...үлтерә

Кеҫә телефонының сперманың күләменә һәм сифатына зарарлы йоғонтоһо фәнни яҡтан раҫланған. Быны венгр ғалимдары 2004 йылда уҡ тикшерә башлай һәм кеҫә телефонын биленә элеп, йә салбар кеҫәһенә һалып йөрөгән ир-егеттәрҙең спермалары бер йыл эсендә 20-30 процентка тиклем сифатын юғалта икәнен раҫлай. Һөйләшмәгән осракта ла селтәр менән тоташтырыу өсөн сигнал биреүе лә зарарлы, сөнки лифтта, метрола йәки башҡа ябыҡ урында булғанда телефон сигналы күп тапҡырға көсәйә һәм эшләү режимы икеләтә әүҙемләшә.

Былтыр Американың репродуктив медицина йәмғиәте конференцияһында шаҡ ҡатырғыс бер доклад тыңлана. Докладта ир-егеттәр өсөн кеҫә телефоны буйынса һөйләшеүҙең дә бик зарарлы булыуы билдәләнә. Тикшеренеүҙәр көслә зат көн дауамында ни тиклем оҙаҡ һөйләшә, сперматозоидтары ла йылдам рәүештә кәмей барыуын асыҡлай.

### Төп дошман - сауна, компьютер һәм ангина

Йылы - ирҙәрҙең енси биҙҙәренең иң яман дошманы. 85 градус эҫелектәге саунала 20 минут тирәһе ултырыу ҙа сперматозоидтарҙың күләме һәм сифаты түбәнәйеүенә килтерә. Мунсанан һуң бер аҙна буйына ла уларҙың сифаты яҡшырмай, фәҡәт биш аҙна дауамында ғына яйлап нормаллаша. Шуның өсөн, әгәр ир менән ҡатын бала теләй икән, был изге уйын ғәмәлгә ашырғыһы килһә, кәмендә өс ай эҫе мунса инмәһен. Ни өсөн тигәндә, сифатлы, яңы сперматозоидтар ун аҙна эсендә генә барлыҡҡа килә.

Һалҡын тейҙереү, грипп (температураның 38-39 градусҡаса күтәрелеүе) һәм ангина ла ир-егет өсөн үтә хәүефле. Был сирҙәр менән ауырығандан һуң енси ҡуҙәнәктәр өс ай буйына яҡшырмай, ә емешле эшмәкәрлеге биш айҙан һуң ғына аяҡҡа баҫа.

Компьютер артында 4-5 сәғәт буйына бер тормай ултырыуҙан да енси биҙҙәр "ҡыҙа". Ә уларҙың артыҡ йылылыуы төп тәбиғи функцияһына кире йоғонто яһай.

### Ғәриплек...алкоголдән

Эскелек менән мауығыу - бөтөн яҡтан да зарарлы. Ирҙәр гормонын эшләп сығарыусы ҡуҙәнәктәрҙе алкоголь яфалауы күптән билдәле. Хәтта алкоголь гипогонадизмы тигән ауырыу ҙа бар. Ул организмдың етерлек кимәлдә тестостерон эшләп сығара алмауын аңлата. Бер һүҙ менән әйткәндә, эскесе ир-ат үҙен иректе рәүештә токомһоҙлоҡҡа дусар итә. Бигерәк тә енси өлгөрөү мәлендә алкоголле эсемлек менән мауығыу хәүефле.

Һыу өсөн пластик шешәләр ҙә һаулыҡҡа зарарлы, сөнки уларҙағы эстрогенға окшаш матдәләр нәҫел ишәйтеү системаһының үҫешен тоткарлай. Шуның өсөн егеттәргә пластик һауыттарҙағы һыу эсеү менән дә мауығырға ярамай.

### Штанганың да хәүефе ҙур...

Балаларҙың спорт менән шөғөлләнеүе хуплауға лайыҡ булһа ла, ауыр әйберҙәр күтәреүгә бәйле спорт төрө уларҙың енси үҫеш системаһына зыян килтерә. Малайҙар гер-фәлән күтәрергә әүәҫләнһә, ауырлыҡтың орлоҡ етерендәге веналарҙың варрикоз киңәйеүен көсәйтеүе, уларҙы түлһеҙлеккә дусар итеүе ихтимал.

Миллиондарса кеше бала сағында ҡолаҡ арты биҙе шешеүенән ауырыһа ла, өҙлөгөп, орхит сиренә дусар булғандар түлһеҙгә әйләнә. Орхит - күкәйлектәрҙең шешеүен аңлата. Әгәр кескәй улығыҙ ҡолаҡ арты шешеп ауырый икән, урамға уйнарға ла сығармайынса, тамам һауыҡҡансы, дауаларға кәрәк.

**("Аргументы и факты" гәзитенән алынды).**



ӘЙТӘГҮР!

# ИКЕ АҘЫМ АЛҒА, БЕР АҘЫМ АРТҠА,

## йәки Һаулыҡ һаҡлау реформалары ҡайҙа алып бара?



**"Кеше һау сағында ни тиклем бәхетле икәнен аңлаһын өсөн Хоҙай уны төрлө ауырыуҙарға дусар итә", тигән бер аҡыл әйәһе. Ысынлап та, ауырыу һорап килмәй, мөхәббәт кеүек, ул да ағас башынан йөрөмәй. Күп ауырыуҙарға беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ дусар итһәк, күпселеге тирә-яҡ мөхиттән килә. Кеше ғүмеренең бер өлөшөндә һаулығын һаҡламай йәшәһә, икенсе өлөшөндә дауаланып йәшәй. Уравған һайын беҙ бер-беребеҙгә һәм үҙебеҙгә һаулыҡ теләйбеҙ, Хоҙайҙан да шуны һорайбыҙ. Теләү һәм һорау ғына аҙ, күрәһең. Сөнки һаулыҡ тигәндә беҙ тик соматик, йәғни тән һаулығын ҡайғыртабыҙ, йән, рух сәләмәтлеген иҫкә төшөрә һалып бармайбыҙ. Һуңғы арала ипохондрия, йәғни әмәтһеҙлек, күңел төшөнкөлөгө, үҙендә мең төрлө сир эҙләү менән ауырыусылар күбәйә бара, фармацевтик рекламалар көнө-төнө ауырыу булырға өндәй кеүек. Бәләкәй генә күләмдәге пособие алыр өсөн ярты Рәсәй инвалид булырға "ризалашты". Йән-тән һаулығы - иң ҙур ҡиммәт. Уны һаҡлау ҙа йәмғиәт өсөн бик ҡиммәткә төшәләр. Ысынбарлыкта шулай микән? Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында БР Дәүләт Йыйылышы-Королтай депутаты Венер Ғәзиз улы СӘХӘҮЕТДИНОВ бәйән итә. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының иң киҫкен мәсьәләләренә ҡағылдым. Улар, әлбиттә, ҡасан да булһа хәл ителәсәк", - ти ул.**

### ҠАШ ТӨҘӘТӘМ ТИП...

"Һаулыҡ һаҡлау" милли проектын ҡабул иткән сакта Рәсәй Президенты һәм Хөкүмәте был өлкәне үҫтереүгә иғтибарҙы арттырыуҙы төп бурыс итеп ҡуйҙы. Быға илдәге демографик хәлдең киҫкенләшеүе генә этәргес көс булманы - бөгөн кешенең ғүмере лә ҡыҫҡара. Һандар ҡот оскос: һуңғы ун йыл эсендә үлем һаны тыуым һанынан күберәк - Ер шарында Рәсәй "мактаулы" 127-се урында! Милли проекты тормошҡа ашыра башлауға күп ваҡыт та үтмәне, матбуғат саралары шаҡ ҡатырғыс "уңыштар" тураһында яҙа ла башланы. Имеш, юлфәлән бөтөнләй булмаған Себер тайғаһындағы дауаханалар өсөн 40 "Газель" автомашинаһы алынған, йә булмаһа, ауыл дауаханаһына эндоскопик стойка алып ҡайтҡандар. Был үтелгән юл. Совет осороноң баш табибтары иҫләйҙер, һәр дауахана Һаулыҡ һаҡлау министрлығы аша заманса медицина ҡорамалдары "эләктерергә" тырыша торғайны. Һәм... улар складтарҙа ҡулланылмайынса "тутыға" ине. Мәҫәлән, эндоскопик стойкала район хирургы 3-4 операция яһаһа, клиник дауахаларҙа шул уҡ ҡоролмала 500-гә тиклем операция яһала.

Бөгөн милли проект буйынса бүленелгән аҡса нисек тотоноласаҡ? Чиновниктарҙан был турала һорарға хаҡыбыҙ бар. Тағы ла, ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығарыу булмаһын. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектына бөгөн ҙур ышаныс бағлайбыҙ, сөнки дәүләт был йүнәлештә бик ҙур күләмдә аҡса бүлергә ниәтләнә. Быға бөтәһе лә ҡыуана - профсоюздар ҙа, депутаттар ҙа, халыҡ та. Һаулыҡ һағында торуысылар, әлбиттә, бөтәһенә ҡарағанда ла шат.

### АҠСА ИМПОРТҠА КИТЕРМЕ?

Европала медицина ҡорамалдары һәр дүрт йыл һайын яңыға алмаштырыла. Ә беҙҙәге медицина аппаратураһының күпселегенә - 30-35 йәш. Сағыштырыу өсөн медицина ҡорамалдары һәм фармацевтика күргәҙмәһенә барығыҙ, үҙебеҙҙә етештерелгән дарыу ҙа, ҡорамалдарҙы тапмаҫһығыҙ, сөнки беҙҙә күптән инде ундай сәнәғәт юҡ. Тимәк, милли проект буйынса бүленгән аҡсаның күп өлөшө импорт тауарҙары һатып алыуға тотоноласаҡ. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектында медицина сәнәғәтен һәм фармацевтиканы үҫтереү тураһында бер нәмә лә әйтелмәгән. Әммә ниңәһе ҡыҙыҡ: фармакология сәнәғәте булмаһа ла, беҙҙә бөгөн аспириндың 450, анальгиндың 400 төрө һатыуға сығарыла. Дарыу баҙарында беҙҙә 2,5 мең күмәртәләп һатыу ойошмаһы теркәлгән. Уларҙы контролгә алып та, тикшереп тә булмай, аптекалар ялған дарыуҙар менән тулған.

### КАДРҘАР ҠАЙҘА?

Дауаханаларҙы заман талабына яуап биргән ҡоролмалар менән тәьмин иткән хәлдә лә, лайыҡлы кадрҙар булмайынса, йөк урынынан ҡуҙғалмаясаҡ. Ә ҡайҙа һуң улар? Рәсәй һаулыҡ һағы башында медицина дипломы булмаған белгес эшләүе үҙе уҡ күп нәмә тураһында һөйләй түгелме? Шуға ла бит дәүләт кимәлендәге һаулыҡ һаҡлауға ҡағылған ҡарарҙар, бойороҡтар медицинанан алыҫ булған кешеләр тарафынан ҡабул ителә. Статистик мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Рәсәйҙәге табибтар һаны башҡа илдәр менән сағыштырғанда бер нисә тапҡырға күп. Әммә сит илдәрҙә ауырыуҙы дауалаусы ғына табиб тип һанала, ә беҙҙә был исемлеккә санитар табиб та, санатоий табибы ла һәм... чиновниктар ҙа инә. Участка дауаханалары табибтарының эш хаҡын арттырыу башҡа табибтар араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Мәҫәлән, утыҙ йыл стажы булған тәжрибәле хирургтың эш хаҡы былтыр ғына уҡыу йортон тамамлаған участка табибынан 4-5 тапҡырға әҙ булыуын нисек аңлатырға?

### 250 МЕҢ КӘРӘКМЕ?

Заман ҡыҙҙары хәҙер 30-35 йәшкә етмәйенсә бала табыу тураһында уйлап та бирмәй, улар тәүҙә аҡса туплауҙы урынлы һанай: йәнәһе, аҡса булһа, баланы тәрбиәләү еңел буласаҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, икенсе балаһы тыуғандан һуң өс йыл үткәс биреләргә тейешле 250 мең һум аҡса уларҙы ҡыҙыҡһындырамы икән? Донъя тәжрибәһенән сығып ҡарағанда ла аҡса менән ҡыҙыҡһындырыу ыңғай һөҙөмтә бирмәй. Мәҫәлән, ата-әсәләр өсөн льготалар булдырылған, башҡа сығымдар түләнгән Францияла тыуым һаны бер ҙә артмай. Беҙҙә бала табыуға һәләтле ҡатын-ҡыҙҙарҙың 70 проценты үҙҙәрен ярлы һанай. Тыуым һаны кәмеүгә, әлбиттә, йәшәү шарттарының насар булыуы ла йоғонто яһай, әммә вәғәҙә ителгән 250 мең тормош шарттарын әкиәттәге кеүек хәл итмәйәсәк.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Һаулыҡ тигәндә, беҙ иң тәүҙә шәхсән үҙ һаулығыбыҙҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Был тәбиғи. Баҡтиһәң, һаулыҡ һаҡлауҙың беҙ белмәгән башҡа аспекттары ла күп икән дә. "Һаулыҡ теләйем, ҡалғанын һатып алырһың", тип әйтергә ярата бер кинофильм геройы. Бөгөн һаулыҡты һатып алырға, ауырыуҙар иҫәбенә кеҫә ҡалынайтырға теләүселәр күбәйҙе түгелме? Нисек уйлайһығыҙ?**

***✓ Ул ябай ғына табип түгел, ә кеше торошона, күңеленә, уй-хистәренә ирекле рәүештә үтеп инә алыусы, уның үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәген алдан күрә белеүсе.***

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

**1922 йылда Өфө губернаһында һәм Бәләкәй Башҡортостанда 2507 мәсет һәм мәсет эргәһендә мәҙрәсәләр иҫәпләнгән. Ә 1945 йылда 12 мәсет кенә эшләгән. Ҡалғандарын иген складтары, клубтар, мәктәптәр итеп үҙгәртеп, күбеһен емереп бөтөрәләр. Баймаҡ районында Рәмиевтар тарафынан һалынған Юлыҡ, Күсей һәм Нуғай мәсеттәре генә ултырып ҡала, улар иген мөгәҙәйҙәре итеп файҙаланыла.**

# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ

30-сы йылдарҙа мәсеттәрҙе ҡолатып, бер ниндәй сәбәпһеҙгә дин әһелдәрен ҡулға ала башлайҙар. Мөжәүир хәҙрәтте лә 1937 йылда ҡулға алып, тәүҙә Баймаҡ, Йылайыр, һуңынан Өфө төрмәһенә оҙаталар. Шул замандарҙа эске эштәр идаралығы органдарында эшләгән Тимергәле Буләков хәтирәләренән: "Миңә эске эштәр идаралығы органдарында эшләгән сағымда Йылайыр төрмәһен күрергә һәм хәҙрәт тураһында заманында бөтә төрмәне хайран ҡалдырған мөғжизәле хәлдәр хаҡында ишетергә, күрергә тура килде. Мөжәүир хәҙрәтте ниндәй генә камераға бикләмәһендәр, уның йоҙағы һәр сак үҙенән-үҙе асыла торғайны. Ҡайһы сакта камерала бикле ҡалған хәҙрәттең, йоҙакты асмайынса, коридор буйлап йөрөгәнен күрәләр. Тәһәрәт алырға йәки намаҙ уҡырға ваҡыт етһә, йоҙаҡтар шатыр-шотор үҙҙәре асыла торған булған. Мөжәүир һаҡсыларҙың күҙен бәйләгән, надзирателдәргә төрмә башлығы сүрәтенә инеп күренгән. Шуға күрә лә ул коридорҙа тороп ҡала алған, хатта камера эсендә ҡалған осракта ла төрмә һаҡсылары камера ишеген бөтөнләй бикләмәй ҡалдырған, йә йоҙакты бикләмәй элеп киткәндәр (Мөжәүир хәҙрәтте 1939 йылдың йәйендә 10 йылға төрмәгә ултырталар һәм 1943 йылдың көҙөндә ваҡытынан алда сығарырға мәжбүр булалар).

Психологтар фекеренсә, телепатия (әүлиәлек итеү) һәләте һәр кемгә тыумыштан, тәбиғәттән һалына. Айырма шунда ғына: кемдер уны үҫтерергә һәләтле, кемдер һәләтенең барлығын да һиҙмәй ғүмер итә. Мөжәүир хәҙрәттәге һәләттең үҫешенә ҙур йоғонто яһаусы уның мөғәллиме Абдулла ишан Сәиди булғандыр. Уның арҙамында Мөжәүир хәҙрәт Хоҙай тарафынан, тәбиғәттән бирелгән һәләтен халыҡҡа хеҙмәт итеүгә бағышлай. Ул ябай ғына табип түгел, ә кеше торошона, күңеленә, уй-хистәренә ирекле рәүештә үтеп инә алыусы, уның үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәген алдан күрә белеүсе.

Бөгөн фәндең бөтә тәрҙәре лә юғары тиҙлек менән үҫеш ала: йыһан киңлектәре тикшерелә, кибернетика, медицина өлкәһендә яңынан-яң асыштар яһала. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ғалимдар асып еткерә алмаған тәбиғәт серҙәре, айырым кешеләр тарафынан тыуҙырылған мөғжизәләр осрап тора. Шундай мөғжизәләрҙең береһе - бар булмышы һәм Хоҙай тарафынан бирелгән һәләте менән халыҡҡа хеҙмәт иткән, Башҡортостанда ғына түгел, республиканан ситтә лә киң билдәлелек яулаған арҙаҡлы шәхес-әүлиә, халыҡ табибы, күрәҙәсе, бағымсы, суфый хәҙрәт Сиражетдинов Мөжәүир Уйылдан улы. Уның кеүектәр ергә бик һирәк тыуа.



**Хәҙрәт 90 йәштә**

Әйтәйек, XX быуат күрәҙәсеһе, телепаты, гипноз оҫтаһы атаклы Вольф Мессинг үҫмер сағында Польшанан Берлинға килеп, аслы-туклы йәшәү һәҙәмтәһендә ярым үлек хәлендә, мәрткә китеп, кире терелгәс, үҙендә шундай һәләттәр барлығын асыҡлай. Ул хатта XX быуаттың титандары булған Гитлер менән Сталиндың яҙмышында ла ҙур роль уйнай.

Мөжәүир хәҙрәтебеҙ Вольф Мессинг кеүек үк, гипнозсы һәм әүлиә булған. Айырма шунда: хәҙрәт бөтә намыҫлы ғүмерен кешеләрҙе һауыҡтырыуға бағышлаған, ә Мессинг бөтә ғүмерен сәхнәләрҙә, циркатарҙа сығыш яһап, акса эшләгән. Ниңә беҙгә лә Мөжәүир хәҙрәтте Мессинг, Вангалар рәтендә донъя кимәленә күтәрмәҫкә? Ул уға хаҡлы бит. Лира Якшыбаеваның тырышлығы, талапсанлығы һәм ҡыйыулығы менән Мөжәүир хәҙрәттең яҙмышы хаҡында ике китап баҫылып сығыуын халыҡ хуплап ҡаршы алды. Әүлиәне күреп белеүселәр бар сакта уның шәхесен фән кимәлендә лә өйрәнергә ине.

* * *

1948 йылда Мөжәүир хәҙрәтте Баймаҡҡа Бәхтегәрәй исемле ҡустыһы ҡунаҡҡа саҡыра. Ашап-эсеп бөтмәҫ элек хәҙрәт доға ҡыла. Хәҙрәттән ни өсөн улай эшләүен һорайҙар. Ә ул: "Әле генә Баймырҙа ауылынан Фазлетдин мулла донъя ҡуйҙы, мәрхүм булып ҡалды, барып етергә кәрәк", - тип яуап бирә.

Мөжәүир хәҙрәт менән был мәжлестә Баймырҙа ауылы кешеләре лә була һәм улар Фазлетдин мулланың үлеме тураһында хәҙрәттән ишеткәс тә ҡайтырға ашыға.

* * *

Хәҙрәт намаҙ уҡыған мәлдә тиҙҙән бик алыҫтан һуҡыр ҡыҙҙы алып килерҙәрен һиҙә. Алыҫтан килеүселәр бик дәрәжәле кешеләр булмаҡсы. Шуға күрә ул әбейенә ҡунаҡтарҙы ҡаршыларға әҙерләнергә, өйҙә тәртипкә килтерергә, мунса яғырға, самауыр ҡайнатырға ҡуша ла, үҙе бер һарыҡ һуйып, ит әҙерләп ҡуя. Хәҙрәт көткән мосафирҙар төшкә табан килеп тә етә. Еңел машинанан тәүҙә эшләпә, ҡиммәтле костюм кейгән ир кеше төшә. Арткы ишектән бөхтә генә кейенгән бойоҡ ҡатын күренә.

- Доченька, Настенька, приехали, - ти ир һәм 12-13 йәшлек ҡыҙыҡайҙы етәкләп машинанан төшөрә. Күренеп тора: ҡыҙ тома һуҡыр. Уларҙың килерен алдан уҡ һиҙеп ултырған хәҙрәт:

- Әйҙүк, үтегеҙ, мин һеҙҙе баянан бирле көтәм, - ти.

- Көтәһегеҙ? - Юлаусы ир ныҡ ғәжәпләнә. - Беҙ килеүебеҙҙе алдан берәүгә лә хәбәр итмәгәйнек бит.

Хәҙрәт барыһын да өйгә саҡыра. Таш һын һымаҡ ҡатып ҡалған ҡыҙға:

- Ҡыҙым, һин дә үт, кил әле бында, - ти һәм янына саҡырып ала.

- Исемең нисек?

- Анастасия!

- Матур исем.

Хәҙрәт ҡыҙға һурып алырҙай үткер карашын төбәй. Уны алдына алып иркәләй, сәстәрен, башын, биттәрен һыйпай, йомшаҡ оҙон бармаҡтары менән ҡыҙ баланың устарын ҡулына ала. Доғалар уҡый, имләп бөткәс, әсәһенә ҡарап:

- Ҡыҙығыҙға күҙ тейгән. Музыкантмы? - ти.

- Эйе.

- Ҡыҙығыҙ тиҙҙән данлыклы пианистка буласаҡ.

- Әллә инде. - Әсә көрһенә. - Һуҡыр көйө был мөмкинме һуң?

- Ҡурҡмағыҙ, төҙәләр.

Шунан ҡәтғи тауыш менән Мөжәүир хәҙрәт ҡыҙға:

- Бар әле, ҡыҙым, сыҡ та, лапаҫтан бер ҡосаҡ утын индер, - тип эш ҡуша.

Ҡыҙҙың әсәһе:

- Она не сможет! Простите, ради бога, она ведь совсем ничего не видит, - ти.

- Борсолма, ханым, мин әйткәндә үтәһен, - ти Мөжәүир хәҙрәт.

Ҡыҙыҡай һәрмәнә-һәрмәнә тышҡа сыға. Ата-әсә, коттары осоп, ҡыҙҙың артынан барырҙай булып ултырһалар ҙа, хәҙрәттән уңайһыҙланып, урындарынан ҡуҙғалмайҙар. Бер нисә минут үтеүгә утын ҡосаҡлаған Анастасия күренә. Күҙҙәре асылған, нур бөркөп тора, йөҙө ҡояштай балҡый, ә үҙе бер туктауһыҙ һөйләнә.

- Атай! Әсәй! Мин күрәм, күрәм! Бына һеҙҙе лә күрәм! - ти шатлыһынан.

Ата-әсә көтөлмәгән мөғжизәнән ни әйтергә белмәй:

- Ысынмы, Настенька? Ысынлап күрәһеңме?

- Күрәм, атай, асыҡ күрәм, әсәй, - ти ҡыҙ. - Дедушка в белом! Он помог мне!

Һәр төрлө дауаханаларға, данлыҡлы табиптарға йөрөп тә һауыҡтыра алмаған һуҡыр күҙҙәң шулай ҡапыл бер ниндәй көсәнеүһеҙ-ниһеҙ асылып китеүенә Мәскәү кешеһе: "Ҡөҙрәтегеҙҙе ишетеп, һеҙгә ныҡ ышанып килдек һәм яңылышмаҡ. Рәхмәт һеҙгә!" - тип, ихлас күңелдән рәхмәт әйтә. Бик күп бүләктәр тәкдим итә Мәскәү кешеһе, әммә хәҙрәт бер нәмә лә алмай. Үҙ ғүмерендә сирҙән ҡотолоп, һауыҡҡандан һуң ни алып, ни бирергә белмәй ҡыуанған әҙәмдәрҙе күп күргән хәҙрәттең иҫе китмәй:

- Үҙегеҙгә рәхмәт, ҡәҙерле ҡунаҡтар. Һеҙгә игелек итә алыуыма үҙем шатмын. Әжере өсөн бер нәмә лә кәрәкмәй. Донъям етеш. Барына Хоҙай бәрәкәт бирһен. Мине, әҙәми затты Аллаһы Тәғәләгә тиңләү ҙур гонаһ. Ярамай. Мин бары әүлиә, күрәҙәсе, табип. Ауырыуҙарҙы һауыҡтыра алыуыма һәр сак шатмын.

Шунан хәҙрәт һүҙҙе икенсегә бора:

- Һеҙ алыҫтан килгәнһегеҙ, арып, асығып бөткәнһегеҙҙер. Инде тамак ялғап алһаҡ та була. Унан ял итерһегеҙ. Мунса ла әҙер.

***

Сибай ҡалаһынан Камила тигән инәй Фәйзулла ауылында машинанан төшөп ҡалып, Манһыр аша Баймаҡҡа ҡайтырға юлға сыға. Был хәл кискә табан була. Иптәш тә булмағас, ул курка-курка бара: "Һис юғында бүре лә осрамай", - тип уйлап ҡуя. Шул сак инәйҙең ҡаршыһына ете бүре килеп сыкмаһынмы! Бүреләр уның алдынан сығып та, ҡушлап та, арттан да эйәрәләр. Әйтерһең дә, инәйҙе Манһырға тиклем оҙатыр өсөн килгәндәр. Ҡурка-ҡурка Манһырға барып етеп, таныштарына сәй эсергә инә әбей. Ошо мәлдә Мөжәүир хәҙрәт тә килеп инә.

- Камила, иптәштәреңде ҡайҙа ҡалдырып киттең? - тип һорай. Камила инәй, ниндәй иптәш тураһында һорай икән, тип аптырағас, хәҙрәт:

- Баяғы һиңә эйәреп килгән ете бүрене әйтәм, үҙең һорап алдың бит, һорамаҫҡа кәрәк ине, - ти.

**Азамат ТАЖЕТДИНОВ,**
**РФ-ның халыҡ мәғарифы алдынғыһы.**
Баймаҡ районы.

**(Аҙағы. Башы 4-се һанда).**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Мөжәүир хәҙрәт кеүек бөйөк шәхестәребеҙҙе үҙҙәре иҫән сакта ҡәҙерләй белмәнек, Совет осоронда улар ҡот осҡос кәмһетелеүҙәргә, ғәйепләүҙәргә дусар ителде, золом ҡорбандарына әүерелде. Бөгөн беҙ һуңлап һәм үҙебеҙҙең Баймаҡ районында булһа ла шуларҙың икеһе алдында бурысыбыҙҙы үтәнек. Улар: Муллакайҙан Абдулла Сәиди һәм уның шәкерте Манһырҙан Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдинов. Бөгөн ауылдарҙа мәсеттәр тәҙөләүе, иҫкеләрене ҡайтанан аякка баҫыуы, моңло аҙан тауыштарының ишетелеүе, халыҡтың күпләп дингә ылығыуы ҡыуандыра. Дини байрамдар үткәреүгә лә күнегәбеҙ. Дин дәүләттән айырылһа ла, йәмғиәттән ул һис ҡасан да айырылмаған. Ҡөрьәндең һәр бер сүрәһе тыныслыҡҡа, сафлыҡҡа, изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәй. Башҡортостан дини низағтарға юл ҡуйылмаған төбәктәрҙең береһе. Артабан да шулай дауам итһен ине.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# Теле-йәшник... йәштәрҙе тиле итмәҫме?

**Балаларым миңә өр-яңы телевизор бүләк итте. Тик мин һуңғы арала ул телевизорҙы токандырырға ҡурка башланым. Ни өсөн тигәндә, ул йәшниктән гел генә агрессия, криминал, әҙәпһеҙлек ағыла.**

Шулай ҙа бер көн кнопкаларҙы баҫҡыслай торғас, 26-сы каналдан "Animal Planet", беҙҙеңсә, "Хайуандар планетаһы" тигән тапшырыуға юлыҡтым. Ирекһеҙҙән, бороңғо ҡол-философ Эзоп әйтеп ҡалдырған һүҙҙәр иҫкә төштө. "Кешеләр тураһында күберәк белгән һайын, хайуандарҙы ныҡыраҡ яратам", тигән ул. Ҡыҙыҡһынып, йәнлектәр тормошон хисләнеп ҡарай башлағайным, үлән уртлап йөрөгән боландарға ҡыуактар араһынан бер арыҫлан ябырылырға йыйынғанын күргәс, тиҙ генә телевизорҙы һүндерә һалдым. Артабан ни булырын күрмәгәс, йәнәһе, йөрәгем әрнемәй. "Школа злословия" тапшырыуын алып барыусы Авдотья Смирнова әйтмешләй: "Эй, был тормош! Иркен тын алып, ҡанатланып, үҙеңде ҡош итеп тойоп, осорға ғына йыйынһаң, шунда уҡ ҡайҙандыр һунарсы килеп сыға шул"...

Ҡот осҡос ҡурҡыныс кинофильмдәр, төрлө психологик триллерҙар күрһәтеп, халыҡты ҡурҡытып тетрәндереү кемгә кәрәк икән һуң? Күрәһең, кәрәктер. Ҡурҡып, тетрәнеп, ҡаушап ҡалған халыҡ менән идара итеүе еңелерәк бит. Телевидениела эшләгән "телевидение академиктары" ла, күрәһең, шул уҡ фекерҙәләр. Тик... беҙҙең оло быуын - уҡырға яратыусы быуын. Беҙ кәрәкле тапшырыуҙы ғына ҡарайбыҙ ҙа, ҡалған мәғлүмәтте гәзит-журналдарҙан алабыҙ. Нисек яратмайһың, был шөғөл беҙҙең бала сактан күңелебеҙгә һеңгән! Мәктәпкәсә йәштәге ҡыҙыҡай сағымда Әклимә исемле йәш кенә тәрбиәсе апай кисен беҙгә йоҡлар алдынан халҡыбыҙҙың "Ел-ел, арба" әкиәтен шундай матур итеп, йырлай-йырлай һөйләгәне әле лә хәтеремдә. Ул бит балаларға халыҡ ижадының гүзәллеген тойорға, тыуған телебеҙҙең нәфислеген аңларға ярҙам иткән. Халыҡ ижадының саф сығанағынан илһам алып үҫкән быуынды телевизор тапшырыуҙарының күңелгә ятышлыһы булмауы бошондормай ул. Башҡаһына эс боша: бөгөнгө балалар халыҡ ижадының тәмен тоймай, телевизорҙан төрлө агрессия карап үҫә. Ундай балалар киләсәктә ниндәйерәк булыр икән?

**Фәүзиә ЯХИНА.**

✓*Хәҙер уйынлы-ысынлы "скверный ҡурайсы" тигән термин уйлап сығарҙылар. Баҡтиһәң, скверҙан башҡа нәмәне күрмәгән һәм белмәгән йәш музыкантты шулай атайҙар икән.*



# Һандуғас ҡыуаҡта
## йәки Ни өсөн халыҡ йыры популяр

**"Йырлағым да килеп, йырламайым, эскенәйем тулы һағышҡа..." тип әйтелә билдәле башҡорт халыҡ йырында. Ошо һүҙҙәргә тәрән мәғәнә һалынған. Йәғни, йыр - ул кеше күңеленең ниндәйҙер күтәренке юғары тойғоға бәйле донъяға урғылышы ғына түгел, ә бәғергә төйөлгән һағыш, ғазап төйөрҙәрен сисеү, уларҙан ҡотолоу, донъяға шатлыҡ аша бағырға ынтылыу ҙа. Был йәһәттән белгестәр йырҙың кешене һауыҡтырыуҙағы иҫ киткес әһәмиәтен дә билдәләй. Икенсе төрлө әйткәндә, йыр - ул кешенең рух сағылышы ла. Халыҡтың рухы ниндәй булһа, йыры ла шундай. Әммә халҡыбыҙҙың рухи хазинаһын тәшкил иткән боронғо йырҙарына мөнәсәбәтебеҙ ниндәй? Ни өсөн беҙ был мәсьәләгә рух юғарылығында ҡарай алмайбыҙ? Ни өсөн халҡыбыҙ гәүһәрҙәре сәхнәләрҙә, мәжлестәрҙә, эфирҙарҙа һирәк яңғырай башланы? Был хәл бөгөнгө асылыбыҙ хаҡында һөйләмәйме?**

**Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессорҙары, башҡорт музыкаһы факультеты деканы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, композитор Айрат ҠОБАҒОШОВ менән йыр сәнғәте кафедраһы уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Римма МУСИНА халыҡ йырҙарына бәйле ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында әңгәмәләшә.**

**▶Сәхнәләрҙә арзан зауыҡ нисек формалаша тип уйлайһығыҙ? Ни өсөн классика кимәлендәге ынйы бөртөктәренә тиң халыҡ йырҙарыбыҙ бөгөн һирәк башҡарыла, уларҙың урынын башҡа йырҙар яулай бара? Сәбәп - халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙамы әллә тамашасыларҙамы? Ғөмүмән, халыҡ йырҙары популяр була аламы?**

**А. ҠОБАҒОШОВ:** Махсус конкурстарҙы иҫәпкә алмағанда, бөгөн йырсыларҙың күбеһе асылда еңел-елпе йырҙарҙы башҡарыуға күсә бара. Ундай йырсылар нисек аҡлана, тиһегеҙ? Йәнәһе, халыҡ еңел-елпе заман йырҙарын ярата, тик халыҡ йырҙарын ғына башҡарып, зал йыйып булмай, имеш. Мин быһың менән килешмәйем, сөнки ысын мәғәнәһендәге юғары сәнғәт бер ваҡытта ла төркөм кимәленә төшөргә, арзан зауыҡҡа ҡулайлашырға, яраҡлашырға тейеш түгел.

Хәҙер таланты булғаны ла, булмағаны ла - барыһы ла йырлай. Урамдан саҡырып индерәләр ҙә йырлаталар. Ана, Вьетнам баҙарҙарына ла йөрөргә яраталар. Унда тауар, ысынлап та, арзан, әммә бер көнлөк, кейемдәре бер кейерлек кенә. Хәҙерге эстраданы мин шул Вьетнам баҙарҙарына сағыштырыр инем. Йырҙары ла ташҡа үлсәйем инде, уларҙы хатта йыр тип тә атап булмай. Һүҙҙәренең дә, көйҙәренең дә бер ниндәй ҙә мәғәнәһе юҡ, бер көнлөк ялтырауыҡ уйынсыҡ һымаҡ. Мин, мәҫәлән, ундай концерттарҙы ҡарай алмайым, ҡарамайым да. Халыҡ һорай, тип, уларға кем сәнғәттең кимәлен төшөрөргә ҡушҡан. Сәнғәттең маҡсаты - халыҡты тәрбиәләү, ә Европа артынан ҡыуыу түгел. Халыҡ үҙе сәнғәт юғарылығына күтәрелергә, сәнғәт ошо маҡсатта эшләргә бурыслы.

**Р. МУСИНА:** Нисек кенә булмаһын, халыҡ йырҙарын башҡарырға тырышыусылар йылдан-йыл күбәйә бара. Төрлө кимәлдә үткән конкурстарҙа олоһо ла, кесеһе лә ҡатнашыуы быға дәлил булып тора. Был шатлыҡлы күренеш. Шул уҡ ваҡытта йырсы менән уны тыңлаусылар араһындағы проблемаға ла иғтибар итмәү мөмкин түгел. Ни өсөн күп кенә халыҡ йырын башҡарыусылар тыңлаусыны уйландыра алмай һуң? Был, беренсенән, йырсынан, икенсенән, тыңлаусынан да тора. Йырсы халыҡ йыры эстәлегенә һалынған фәлсәфәне үҙ рухы, йөрәге аша үткәреп башҡарһа ғына, тыңлаусы шундай уҡ рух юғарылығында фекерләй, шулай уҡ көйҙө йөрәге аша ҡабул итә алһа ғына, ике яҡ та маҡсатҡа ирешә ала, тигән һүҙ. Башҡорт халыҡ йыры башҡарыусынан да, тамашасынан да, ике яҡтан да берҙәй үк яуаплылыҡты талап иткән сәнғәт юғарылығы. Башҡорт халыҡ йырҙарының эстрада кеүек популяр булмауының төп сәбәбе, минеңсә, бына ошонда буғай. Ул, заман модаһына эйәреп, популяр була ла алмаясаҡ.

Беҙ юғары һәм махсус уҡыу йорттарында буласаҡ йырсыларға методик белем бирәбеҙ биреүгә, уларҙың тауыш мөмкинлектәрен асабыҙ. Әммә халыҡ йырын башҡарыу даланы йырсының тәбиғәтендә булмаһа, йырсы ошо тормош менән йәшәмәһә, юғары уҡыу йортонда уҡып ҡына халыҡ йырын бар нескәлегендә башҡарыу мөмкин дә түгелдер.

Еңел-елпе йыр башҡарһалар, залдағы йәштәр "У-у-у-у-у!" тип ҡысҡырыша, аяҡ тыпырҙата башлай. Уларға өлкәнерәктәр ҡушыла, һөҙөмтәлә тамашасыла арзан зауыҡ тәрбиәләнә. Был зауыҡтың булмауы ғына түгел, ә тәртипһеҙлек һәм наҙанлыҡ күренеше.

**▶Тимәк, һүҙенең мәғәнәһе, көйөнөң зауығы булмаған йырҙы башҡарған йырсы үҙ халҡының аңын томалай, ҡиммәттәрен осһоҙлай, йәштәрен ысын ҡиммәттәрҙән тайпылдыра, булып сыға түгелме? Был шулай уҡ үҙ халҡыңдың рухын ҡаҡшатыуға йүнәлтелгән эшмәкәрлек булып сыға бит, улайһа...**

**Р. МУСИНА:** Тимәк, шулай килеп сыға. Йырҙың бит зары була. Беҙҙең халыҡ йырҙарының асылы ла шул зарҙа. Бар нәмәгә лә өйрәтеп була, әммә йырсыны зарға өйрәтеп булмай. Ундай мөмкинлек юҡ. Зар йырсыла йә бар ҙа, йә юҡ.

Күп нәмә халыҡтың үҙенән тора. Еңел-елпене тыңлаусылар күп булғас, уны башҡарыусылар ҙа күп. Бынан нимә килеп сыға: башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусылар күп булһын, тиһәк, уны баһалаусыларының да шундай уҡ нисбәттә булыуы талап ителә. Халыҡ йырын аңлаусы кешеләр үҙҙәренең мәҙәни кимәле буйынса юғары тороусылар, ундай юғарылыҡ беҙҙә бик һирәк әле.

**А. ҠОБАҒОШОВ:** Башҡорт халыҡ йыры, моңо ул халҡыбыҙҙың туған теле һымаҡ мөһим әһәмиәткә эйә булған төшөнсә. Башҡорт телен белмәйенсә, аңлашып-һөйләшеп булмаған кеүек, башҡорт моңон аңламайынса тороп, йырсы менән тамашасы араһында



*Йырҙың бит зары була. Беҙҙең халыҡ йырҙарының асылы ла шул зарҙа. Бар нәмәгә лә өйрәтеп була, әммә йырсыны зарға өйрәтеп булмай. Ундай мөмкинлек юҡ. Зар йырсыла йә бар ҙа, йә юҡ.*

*Күп нәмә халыҡтың үҙенән тора. Еңел-елпене тыңлаусылар күп булғас, уны башҡарыусылар ҙа күп. Бынан нимә килеп сыға: башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусылар күп булһын, тиһәк, уны баһалаусыларының да шундай уҡ нисбәттә булыуы талап ителә. Халыҡ йырын аңлаусы кешеләр үҙҙәренең мәҙәни кимәле буйынса юғары тороусылар, ундай юғарылыҡ беҙҙә бик һирәк әле.*

диалог бер ҡасан да уңышлы килеп сыҡмаясаҡ. Элекке йырсылар ни өсөн тәбиғи йырлаған, сөнки уларҙың моңон тәбиғи ҡабул иткән тамашасыһы ла булған. Элек йырсылар ҙа, уны ҡабул итеүселәр ҙә бишек йырынан башлап, тел һәм моң мөхитендә тәрбиәләнгән.

Хәҙерге йырсылар телде лә, моңдо ла аңламай. Улар һүҙҙәрҙе һәм көйҙө ятлап ҡына башҡара. Хәҙер уйынлы-ысынлы "скверный ҡурайсы" тигән термин уйлап сығарҙылар. Баҡтиһәң, скверҙан башҡа нәмәне күрмәгән һәм белмәгән йәш музыкантты шулай атайҙар икән. Шуның кеүек "скверный йырсылар" ҙа күбәйҙе. Улар инкубатор себештәре кеүек үтә шул тиклем үҙгәреп китә, хатта тәүсығанаҡты танып та булмай. Мәғәфүр Хисмәтуллин "Беҙҙә халыҡ йырҙарын дөрөҫ йырламайҙар, милизмдар менән артыҡ мауығалар", тип әйтә торғайны.

**▶Беҙҙең гәзиттең "Монолог" рубрикаһында сығыш яһаусы билдәле композитор Ләйлә Исмәғилева "Хәҙерге заман башҡорт һәм татар көйҙәрен дә бутап бөтөрҙөләр. Был ике милләттең халыҡ йырҙарын ғына сағыштырып ҡарағыҙ: ер менән күк араһы...", тип ошо мәсьәләгә ҡарата борсолоуын белдергәйне. Ысынлап та, йырҙар хәҙер буталды: бер үк йырҙарҙы башҡортса ла, татарса ла йырлайҙар. Әлбиттә йырҙың йыртығы юҡ, әммә йыр менән бергә милли үҙаңдың юйылыуы ла бар бит...**

**А. ҠОБАҒОШОВ:** Был, ысынлап та, айырым һөйләшеүҙе талап иткән ҙур проблема. Туғандаш татар халҡы менән тел яғынан айырмалыҡ булған кеүек, моңдарыбыҙҙа ла айырмалыҡ бар. Хәҙерге заман башҡорт һәм татар йырҙары буталыуында иң тәүҙә композитор һөнәренә кәсеп тип ҡарағандар ғәйепле. Элекке быуын композиторҙары Хөсәйен Әхмәтов, Заһир Исмәғилев әҫәрҙәрендә һәр ҡайһыһының үҙенә генә хас интонацияһы бар һәм йырҙары беҙҙең халыҡ йырҙарына нигеҙләнгәс, уларҙы башҡа халыҡтыҡы менән бутау мөмкин түгел ине. Татарҙарҙың да үҙ халыҡ йырҙарының интонацияһын тәрән итеп тойған Рөстәм Яхин, Сара Садыкова күбәйеп китте, береһенән-береһен һис тә айырып булырлыҡ түгел. Халыҡ йырын башҡарыусылар тәбиғәттең үҙе менән бергә тыуырға тейеш.

Халыҡ йырында тормош һәм мәңгелек хаҡында фәлсәфә, унда беҙҙең булмышыбыҙ, тарихыбыҙ ята. Уны аңлауы еңел түгел. Ҡайһы саҡ хатта музыканттар: "Башҡорт халыҡ йырҙары бер-береһенә оҡшаған бит, айырып булмай", - тип шаҡ ҡатыра. Ысынында иһә, башҡорт халыҡ йырының һәр ҡайһыһы тик үҙенә генә хас структураға эйә, уларҙы зауыҡ яғынан наҙан ғына бутайҙыр, әммә халыҡ йырын аңлау өсөн иң тәүҙә тарихын һәм фәлсәфәһен аңлау талап ителә. Башҡорт халыҡ йыры тик нотаға ҡарап ҡына башҡарыла торған йыр түгел, йөкмәтке тәрәнлеге уларҙың фәлсәфәһендә, моң йөкмәткеһендә ята. Ҡайһы бер йырсылар халыҡ йырын төрлөсә бөҙрәләтеп ебәрә, көй кеүек композиторҙары бар. Хәҙерге композиторҙарҙың күбеһе үҙ тамырҙарын тоймағас, халыҡ йырҙарын аңламағас, улар яҙған йыр ишараттарында ла был тамыр һиҙелмәй. Ике халыҡтың заман йырҙары буталыу бына ошонан килә. Беҙ йыр сәнғәтебеҙ үҫә, тибеҙ. Ул, киреһенсә, халыҡ ижады юғарылығынан түбән төшә бара. Үҙҙәрен композитор тип үҙҙәре атап йөрөүселәр хәҙер һәр бер ҡыуаҡ һайын, белеүебеҙсә, һандуғас ҡыуаҡта һайрамай. Уларҙың тегенән-бынан йолҡоп алып әтмәләгән йыр әкәмәттәре ни башҡортса, ни татарса түгел. Хәҙер ундай "композиторҙар" башҡорт һәм татар ерлеге менән генә мөрхәтһенмәй, Европа, төрөк, һинд йырҙары интонацияһын да сәлдерә башланы. Үҙебеҙҙең бөйөк халыҡ йырҙарыбыҙ, ниндәйен бай ауыҙ-тел ижадыбыҙ бар, һәр бер ижадсы ана шул нигеҙҙә яҙырға тейеш. Әлбиттә, һәр замандың үҙ йыры була, XVШ быуатта бер төрлө, XIX, XX, XXI быуаттарҙа үҙенә күрә, әммә ниндәй генә быуатта тыуһа ла, башҡорт йыры татарса ла түгел, европаса ла, төрөксә лә, һиндсә лә түгел, нәҡ башҡортса булырға тейеш. Уны боҙорға бер кемдең дә хаҡы-хоҡуғы юҡ. Боҙоусыларҙы күптән фашларға кәрәк ине.

Мин аранжировканы кейем менән сағыштырам. Унан ҡурҡырға ярамай. Һәр быуатта йәшәүсе кеше шул быуатҡа хас кейем кейгән кеүек, халыҡ йырҙарын пропагандалау маҡсатында уны оҫта итеп эшкәртеп башҡарыу мотлаҡ. Ҡайһы берәүҙәр, аранжировка халыҡ йырын боҙа, ти. Минеңсә, уны һәр заманға ярашлы популяр ғына итә. Йырҙың быуаттар буйына ҡиммәте кәмемәҫ төп нөхсәһе һаҡлана бит, ул - классика, беҙ уны боҙорға хаҡлы түгелбеҙ.

**Р. МУСИНА:** "Йырҙарыбыҙ - бер, моңдарыбыҙ - бер", тиһәләр ҙә, башҡорт халыҡ йырҙары менән татар халыҡ йырҙары бөтөнләй айырыла. Барыбер беҙҙең халыҡ йырында ниндәйҙер фажиғәлек, шул уҡ ваҡытта тотанаҡлыҡ бар. Билдәле рәссам Әхмәт Лотфуллиндың "Оҙатыу" тигән эшендә тотанаҡлыҡ сифаты бигерәк асыҡ сағыла. Унда бер яҡта өс ир һуғышҡа китеүе, икенсе яҡта - уларҙы оҙатҡан ҡатындары һүрәтләнгән. Унда китеүселәр ҙә, оҙатыусылар ҙа был хәлде бик ауыр кисерә, улар эстән яна, айырылғыһы килмәй, шул уҡ ваҡытта әрһеҙләшеп бер-береһенә ташланмай ҙа. Беҙҙең халыҡ йырҙарында тап ошондай характер сағыла ла инде. Беҙҙең халыҡ йырҙарының һәр береһенә хас үҙ милизмы бар.

Башҡорт йырҙары менән татар йырҙары, ошо ике халыҡтың бейеүҙәре кеүек үк, айырылып тора. Уларҙы бутау мөмкин дә түгел. Татар йырҙарына һығылмалыҡ, йомшаҡлыҡ хас. Беҙҙең йырҙар һәм бейеүҙәр тәбиғәт, ер менән нык бәйле. Шуға күрә зарыбыҙ ҙа һауала түгел, ерҙә.

✓*Быларҙан сығып, мин шул хаҡта ла әйткем килә: йырсы булыу - ул талант ҡына түгел, ә эшмыш та. Халыҡтың яҙмышын белмәйенсә, шул яҙмыш менән йәшәмәйенсә, уның йырын да йырлап булмайҙыр ул.*



# ҺАЙРАМАЙ, була алмай...

Былар барыһы ла ошо ике халыҡтың тәбиғәте, психологияһы икеһенеке ике төрлө булыуҙан килә. Татар кешеһе башҡорт халыҡ йырын башҡара алмай, сөнки ул йырҙы тойоу татарҙың тәбиғәтендә юҡ.

▶**Халыҡ йырҙарын башҡарыуҙы үҙенең йөрәк ғәмәле, йәшәү мәғәнәһе итеп алған яратҡан йырсыбыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Райман Ишбаев арабыҙҙан бик иртә китеп барҙы. Ул йырсы ғына булманы: фәйләсүф тә, шағир ҙа ине...**

**Р. МУСИНА:** Ҡайһы бер йырсылар халыҡ йырҙарын башҡарғанда өҫкө ноталарға китеп, шунда тауышты тотоп тора, йәғни үҙенең тауыш мөмкинлеген күрһәтә. Ә Райманда былдай сифат юҡ ине. Ул йырҙы бар булмышы менән тойоп, йөрәге ярылып китерҙәй булып башҡара торғайны. Йөрәк тауышы ишетелгәс, уның йыр башҡарыу техникаһындағы етешһеҙлектәре лә беленмәне. Райман китаптарҙы күп уҡыны. Миңә лә килтерә торғайны. Бер һинд авторының китабында йырлауҙың мәғәнәһе хаҡында яҙылғайны. Миңә килһә, уҡыған китаптары хаҡында мауығып китеп һөйләй торғайны. Һөҙөмтәлә ул йырҙың нимә икәнен тәрән тойоп йырлай башланы. Ул, ғөмүмән, тормош, ғүмер һәм ижад хаҡында фәлсәфә менән мауыҡты. Райман киләсәктә ҙур йырсы була торған талант эйәһе ине.

**А. ҠОБАҒОШОВ:** Уның йөрәге йырлай башлағанда ғына донъянан китеп барыуы бик үкенесле, әлбиттә. Райман шундай тауыш мөмкинлектәре була тороп та, заман шауҡымына эйәрмәне, башҡорт халыҡ йырына тоғро булып ҡалды.

**Р. МУСИНА:** Райман йәшерәк ваҡытында күп нәмәне юғалтыуын аңлағандан һуң ғына сәмләнеп йәшәргә, тәбиғи һәләтен үҫтерергә ашыҡты, ашҡынды. Ни өсөн Раймандың йыры башҡаларҙан айырылып тора һуң? Хатта профессиональ яҡтан юғары торған йырсылар ҙа уның һымаҡ йырлай алмай. Сөнки Раймандың яҙмышы ла, хатта үлеме лә фажиғәле. "Римма апай, минең шул тиклем бәхетле булғым килә", тип әйтә торғайны ул. Быларҙан сығып, мин шул хаҡта ла әйткем килә: йырсы булыу - ул талант ҡына түгел, ә яҙмыш та. Халыҡтың яҙмышын белмәйенсә, шул яҙмыш менән йәшәмәйенсә, уның йырын да йырлап булмайҙыр ул. Ә яҙмышҡа уҡытып өйрәтеп, уны яһап булмай. Үҙ халҡының яҙмышын, уның шатлыҡ-һағыштарын, фажиғәһен үҙенеке итеп күреп, уртаҡлашҡан кеше генә Райман һымаҡ йырлай алалыр. Күпме бөйөк йырсылар бар, береһен ҡабул итәбеҙ, икенсеһен - юҡ, сөнки уларҙың береһе баш, икенсеһе - йөрәк менән йырлай.

Раймандың тормошо, яҙмышы нисек кенә ҡатмарлы булмаһын, ул бик миһырбанлы кеше булды. Эсендә йәшерен уйы булманы, бар булмышы тышында ине. Ғүмеренең яңы һынылышында Раймандың йыры ғына түгел, көнкүреше лә ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, ул ғүмерҙең ҡәҙерен белеп йәшәй генә башлағанда... Иҫән булһа, был хаҡта башҡаларға һабаҡ булырлыҡ күпме иҫтәлектәр яҙа ала ине. Шундай яҙмышлы кешенең халыҡ йырында һәм уның тарихында үҙ-үҙен эҙләүе һәм табыуы, тәүбәгә килеүе хаҡында иҫ киткес уҡымлы һәм кәрәкле китап килеп сығыр ине.

▶**Беҙҙә башлыса Европаның вокаль мәктәбе буйынса йырсылар әҙерләйҙәр. Әйтәйек, бер ниндәй ҙә уҡыу йортонда белем алмаһалар ҙа, әйтәйек, Сөләймән Абдуллин, Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев кеүек башҡорт халыҡ йырҙарын халыҡсан башҡарған йырсылар донъя йөҙөндә юҡ. Был башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар өсөн үҙенә айырым сәнғәт мәктәбе, айырым уҡыу йорто төҙөү зарурлығы хаҡында һөйләмәйме икән?**

**Р. МУСИНА:** Ҡайһы ваҡыт халыҡ йырсылары вокаль кафедрала әҙерләнергә тейеш түгелдер, тип тә уйлап ҡуям. Беҙ күберәк методика буйынса шөғөлләнәбеҙ, йырсыларҙың тауыштарын асабыҙ һәм камиллаштырабыҙ, әммә халыҡ йырсыларын әҙерләүҙе маҡсат итеп ҡуймайбыҙ бит. Был беҙҙең эштең етешһеҙлеге хаҡында һөйләмәй, ә халыҡ йырсылары әҙерләүҙең махсус мәктәп зарурлығы хаҡында әйтә.

"Башҡорт халыҡ белкантоһы" тигән халҡыбыҙҙың үҙенә генә хас белкантоһы бар. Әммә был күренеш әле өйрәнелмәгән һәм уның өҫтөндә эшләүсе ғалимдар һәм музыканттар бөтөнләй юҡ. Беҙ вокаль бүлегендәге уҡыусыларға халыҡ йырҙарының тарихын бына ошонан уҡы, тип тәҡдим итәбеҙ. Әммә бының менән генә лә артыҡ эш ҡыйратып булмай. Әйтәйек, "Бейеш" йырын өйрәнәбеҙ икән, ти. Ни өсөн Бейеш үҙ ерендә ҡасҡын булып, йортона һәм ауылына ҡайта алмай йөрөгән һуң? Әле яңыраҡ Шәйехзада Бабичтың һөйәктәрен ҡайтанан ерләнеләр. Әле беҙҙең халыҡтың күбеһе уның ҡайһы урында, нисек һәләк булғанын да белмәй әле. Тарихыбыҙ биттәрен асып ҡараһаҡ, фажиғә өҫтөнә фажиғә. Ни өсөн халҡыбыҙ шундай фажиғәле яҙмышҡа дусар булған һуң? Бына ошо һорауҙарға яуап эҙләгән, халҡыбыҙ фажиғәһен йөрәге менән тойған йырсы ғына йырҙы урын-еренә еткереп башҡара ала. Башҡорт халыҡ йырҙары тарих менән нык бәйле, унан айырылғыһыҙ. Әле беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙе лә уҡып ҡына беләбеҙ.

**А. ҠОБАҒОШОВ:** Сөләймән Абдуллин, Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев кеүек йырсыларҙы вокаль кафедраға килтереп уҡытһаҡ, уларҙың башҡарыу манераһындағы халыҡсанлыҡ юғалыр ине. Шул уҡ ваҡытта вокаль бүлектә уҡығандар улар кеүек йырлай алмай. Миңә ҡалһа, халыҡсан йырлау мәктәбен ниндәйҙер уҡыу йортонда асып булмаясаҡ, ул мәктәп - халыҡтың үҙендә, уның рухи ерлегендә һәм булмышында йәшәй.



*Халыҡ йырында тормош һәм мәңгелек хаҡында фәлсәфә, унда беҙҙең булмышыбыҙ, тарихыбыҙ ята. Уны аңлауы еңел түгел. Ҡайһы саҡ хатта музыканттар: "Башҡорт халыҡ йырҙары берберeһенә оҡшаған бит, айырып булмай", - тип шаҡ ҡатыра. Ысынында иһә, башҡорт халыҡ йырының һәр ҡайһыһы тик үҙенә генә хас структураға эйә, уларҙы зауыҡ яғынан наҙан ғына бутайҙыр, әммә халыҡ йырын аңлау өсөн иң тәүҙә тарихын һәм фәлсәфәһен аңлау талап ителә. Башҡорт халыҡ йыры тик нотаға ҡарап ҡына башҡарыла торған йыр түгел, йөкмәтке тәрәнлеге уларҙың фәлсәфәһендә, моң йөкмәткеһендә ята.*

**Р. МУСИНА:** Әле уйнауҙары берберeһенә һыу тамсыһы кеүек оҡшаған ҡурайсылар барлыҡҡа килде. Минеңсә, ҡурайсылар ҙа, йырсылар кеүек, үҙ ерлегендәге башҡарыуҙы тыңлап, үҙенсәлекле башҡарыу манераһына эйә булырға тейеш. Халыҡ йырсыһы һәм ҡурайсыһы булыр өсөн училище һәм академия белеме генә аҙ шул. Был уҡыу йорттары йырсының һәм ҡурайсының тәбиғәтендә һәм асылында булған һәләттәрен камиллаштыра һәм үҫтерә генә ала. Миңә ҡалһа, һәр бер йырсы ҡурай уйнамаһа ла, һәр бер ҡурайсы иң беренсе нәүбәттә йырсы булырға тейеш. Ни өсөн тигәндә, һәр бер йыр айырым мәғәнәне аңлатҡан һүҙҙәрҙән тора һәм йырҙың фәлсәфәһен тойор өсөн уны мотлаҡ йырларға кәрәк. Тик йыр аша көйҙөң эске йөкмәткеһенә үтеп ингән ҡурайсы үҙенсәлекле итеп башҡарыу маһирлығына эйә. Был йәһәттән атаҡлы Ишмулла Дилмөхәмәтовтың ҡурайсы булыу феномены уның йырсы булыуы менән аңлатыла. Шулай уҡ ҡурайсы Юлай Ғәйнетдиновтың да бик оҫта йырсы икәнен беләбеҙ.

**А. ҠОБАҒОШОВ:** Һәр бер башҡорт ҡурай уйнарға тейеш. Шулай булғас, ҡурайсыларҙың күп булыуынан ҡурҡырға ярамай. Ҡурайсыға йә йырсыға уҡытып ҡына өйрәтеп булмай, әгәр ҙә улар үҙ алдына шөғөлләнмәһә, туҡтауһыҙ эҙләнмәһә, уҡытыуҙың һөҙөмтәһе аҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**

**яҙып алды.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Сәнғәт, музыка белгестәренең фекерҙәренә өҫтәп, тик шуларҙы ғына әйтергә ҡалалыр:**

**1.Халыҡ йыры сәнғәтен һаҡлау, үҫтереү башҡорт халҡын һаҡлау, үҫтереү мәсьәләһе кеүек үк мөһим һәм зарур, был ике мәсьәлә бер бөтөндә тәшкил итергә тейеш.**

**2.Халыҡ йырын башҡарыусылар мәктәбен, ә юғары уҡыу йортонда бүлек, факультет асыу - өлгөрөп еткән мәсьәлә.**

**3.Башҡорт халҡының милли үҙаңын юйыуға йүнәлтелгән йырҙар сәхнәләрҙә һәм эфир аша яңғырарға тейеш түгел. Был - глобалләшеүгә ҡаршы тороу ҙа.**

*ҒӘФҮ ИТ!*

# ЙӘРЕМ ДӘ СИТ,

## тормошом да үҙемдеке түгел

**Бер-береһе өсөн тыуған парҙар барлығына ышанам мин. Хоҙай Тәғәлә кешене ергә яңғыҙын ебәрмәй, уны ғына аңларҙай, ауыр саҡта терәк булырҙай ишен дә табып бирә. Ана шул икәү ҡауышһа, йәшәүҙең йәме лә, тәме лә була.**

Мин урта йәштәрҙе уҙған ир. Ситтән ҡарағанда ер йөҙөндә минән дә бәхетлерәк кеше юҡтыр кеүек тойола. Донъям төҙөк, эшләгән эшем яҡшы, янымда ҡалаҡҡа һалып йоторҙай сибәр ҡатыным, ике балам, туптай йүгереп йөрөгән ейәнсәрем бар. Ҡыуанып ҡына йәшә лә бит... Юҡ, мин бәхетле түгелмен. Йылдар үткән һайын миңә үҙемдең тормошом менән йәшәмәгәнмен кеүек тойола, хатта яратҡан улым менән ҡыҙым да минеке булырға тейеш түгел һымаҡ. Үтелмәгән ғүмер һуҡмағым йәшлегем таңында һаман да мине көтә төҫлө. Бик яңылыштым, үҙемде генә түгел, күптәрҙе бәхетһеҙ иттем мин.

Студент йылдары. Икенсе курста уҡып йөрөгәндә параллель төркөмдә уҡыусы ҡыҙға ҡапыл үлеп ғашиҡ булдым. Май айындағы ҡайын япрағылай йәшел күҙле Гөлзилә лә миңә мөхәббәт менән яуап бирҙе. Ул йылдарҙа атлап түгел, осоп йөрөнөм, тик бәхеттә генә йөҙҙөм. Икебеҙ ҙә ғаиләлә берҙән-бер бала булғас, бер көтөү балалар тураһында хыялландыҡ. Ҡулға диплом алғас, Гөлзилә тыуған районына ҡайтып китте, мине алыҫ Себергә эшкә ебәрҙеләр. Ни өсөндөр, ғаилә ҡорорға иртәрәк, тип иҫәпләнек. Араны, әлбиттә, ҡайнар хистәр тулы хаттар бәйләне. Ярты йыллап ваҡыт уҙғас, һөйгәнем тиҙерәк ҡайтыуымды үтенде, минең ситтә булыуым уртаҡ хыялдарҙың емерелеүенә килтерәсәк, тип яҙҙы. Уның былдай кәйефен артыҡ һағыныуға бәйләнем, бер йыл ғүмер “һә” тигәнсә үтеп китер, тип ышандым. Бер аҙҙан ҡыҙымдан хаттар өҙөлдө. Ни эшләргә белмәй, аптырағас, дуҫыма Гөлзиләнең хәлен белеп, яҙып ебәрергә ҡуштым. Үҙ ғүмеремдә иң ҡурҡыныс хат алдым: "Гөлзилә яҙмышын икенсе кеше менән бәйләгән. Улар ауылдан ситкә сығып киткән, оҙаҡламай бәпестәре тыуырға тейеш."

Үлеп терелдем мин ул саҡта. Гөлзиләнең былдай ҡылығы башыма һыйманы. Ҡот осҡос ҙур хыянат аяҡтан йыҡты. Туҡтамай эсеп ятып, эшемдән ҡыуылып, Башҡортостанға ҡайттым. Ары-бире һуғылып йөрөгәндә Гөлзиләнән хат тотторҙолар! "Мин һаман да һине яратам. Теге саҡта ҡайтып өлгөрһәң, беҙ бергә булыр инек. Яуыз ир мине көсләне. Ауырға ҡалғанымды белгәс, аҫылындым. Эх, шунда күрше инәй килеп элмәктән алмаһа, был тиклем ыҙа күрмәҫ тә инем. Һуңынан әллә нимә булды, аҡылым томаланды, теге яуыз аяғыма йығылғас, эйәреп сыҡтым да киттем. Балабыҙ үле тыуҙы. Мине ул кеше менән бер нимә лә бәйләмәй. Әгәр һин риза булһаң, осрашып, һөйләшәйек, аңлашайыҡ". Хатҡа яуап яҙманым.

Бер-бер артлы йылдар уҙҙы. Мин әлеге ҡатынымды осраттым, тормошом үҙ яйына һалынды. Тик Гөлзиләне көндән-көн нығыраҡ һағына башланым. Һөйгәнемдең әхирәтен осратып, аяныслы ваҡиғаның тап теге хатта яҙылғанса булыуын белгәс, үҙемде бик ғәйепле тойҙом. Бар ҡыйыулығымды йыйып, ҙур ауырлыҡ менән эҙләп тапҡан Гөлзиләнең телефон номерына шылтыраттым. Хатта "Һаумы", тип әйтеп өлгөрмәнем, ул миңә исемем менән өндәште. "Осрашайыҡ", тинем. "Кәрәкмәй, ун биш йылға һуңланың", тип яуапланы. "Барыһын да онотайыҡ, ташлайыҡ, бергә булайыҡ", тип үрһәләндем. "Минең ирем ауырып, түшәктә ята, уны ҡалдырырға хаҡым юҡ. Башҡаса шылтыратып, йөрәгемде үртәмә",- тип өҙә һуҡты уның тауышы. Ошо һөйләшеүҙән һуң мин уны мәңгегә юғалттым, әммә тағы ла нығыраҡ ярattым. Балалары булмаһа ла, Гөлзилә яҙмышын емергән яуызды ауырыу килеш ташламауы, уны ғәфү итеүе ғәжәпкә ҡалдырҙы. Тик минең хатамды ғына кисерә алманы шул. Бәлки, асыу ҙа тотмай торғандыр, мин бит уның менән күрешмәнем, май айындағы йәшел ҡайын япрағылай күҙҙәренә ҡарамаһым. Йылдар аша ғәфү үтенәм, ғүмер буйы өҙөлөп һөйгән йән-йәрем! Тыуымаған балаларыбыҙ, тормошҡа ашмаҫ хыялдарыбыҙ, бүләк ителмәгән наҙҙарым, бергә йәшәлмәгән көндәрем... Кисерә күр! Ярлыҡа мине!

**Таһир ТАЙЫПОВ.**

*✓Хатта сит ил музыкаһын тыңлаған өсөн дә кешене иркенән мәхрүм иткән осраҡтар була торғайны. "Антисоветчиктар" менән көрәшеү шауҡымы әрмене лә урап үтмәне.*

# Әрме V

## Мин - ракетасы

1960 йылдың 1 майында совет ғәскәрҙәре Свердловск ҡалаһынан алыҫ түгел ерҙә Америка Ҡушма Штаттарының разведка самолетын бәреп төшөрҙә. Ауылыбыҙ уҡытыусыһы Әхмәт ағайҙың, был самолетты ракета менән сәпәгәндәр, тип һөйләгәне хәтеремдә. Тиҫтә йылдар үткәс, миңә ул ракеталарҙы күрергә генә түгел, улар менән идара итергә тура килде. Америка осоусыһы Пауэрстың самолетын С-75 зенит-ракета комплексы ярҙамында ҡолаталар. Был ракеталарҙы шыйыҡ яғыулыҡ менән заправкалайҙар ине. Улар 150 метрҙан алып 25 километрға тиклем бейеклектә осҡан сәпте юҡ итергә һәләтле була.

Прискулелағы уҡыу үҙәгендә тап ошо С-75, С-125 тибындағы зенит-ракета комплекстары өсөн белгестәр әҙерләнеләр. Мин С-125 комплексына белгестәр әҙерләгән төркөмгә эләктем. Ҡулайламала ике ракета, яғыулыҡ итеп махсус дары файҙаланыла. Ракеталар 50 метрҙан алып 15 километрҙа осҡан сәптәрҙе атып төшөрөү ҡеүәтенә эйә.

1969 йылда Израиль илбаҫарҙары ғәрәп илдәренә һөжүм итә. Мысыр Президенты Ғәмәл Әбдел Насер йәһүдтәрҙең һауа һөжүменә ҡаршы ғәскәр ебәреүҙе һорап, Советтар Союзына мөрәжәғәт итә. Ғәрәптәргә ярҙамға тәүҙә С-75 ҡулайламалары оҙатыла. Тик йәһүд летчиктары хәйләләшә - самолеттар ерҙән 5О метр бейеклектә оса башлай. Үрҙә яҙыуымса, совет ракеталары был осраҡта сәпте "тота" алмай. Аҙаҡ С-125 системаһын оҙатырға тура килә. Был системаның әһәмиәте шунда: ул Израилға Американан ебәрелгән F-15 кеүек заманса истребителдәрҙе лә 50 метр бейеклектә тар-мар итә ала. Мысырҙа, Сирияла ошо осорҙа унға яҡын совет зенит-ракета дивизионы дежурҙа тора. Израиль самолетынан ебәрелгән "һауа-ер" класлы ракета шартлап, бер дивизионда унлап һалдатты һәләк итә. Уларҙың иҫтәлегенә ваҡытында йыр ҙа иждат ителгәйне. Үҙем күп тапҡырҙар ишеттем. 1972 йылда Советтар Союзы һәм Мысыр етәкселеге араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтар арҡаһында, совет ракетасылары ғәрәп илдәренән сығарылды, һалдат-сержанттарҙы башка частарға тараттылар, техника ғәрәптәргә ҡалды.

Әйтергә кәрәк, совет ғәскәрҙәре ғәрәп илдәренең һауа киңлектәрен һаҡлағанда дошмандың күп кенә самолетын юҡ итте. Байтаҡ һалдат-офицерҙар орден-миҙалдарға лайыҡ булды. Яугир-интернационалистар араһында Башҡортостан вәкилдәре лә бар. Улар хәҙер "Сикләнгән хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусы" исемен йөрөтә. Бәлки, ошо яҙмаларҙы уҡыған, улар үҙҙәре хаҡында хәбәр ҙә итерҙәр. Афғанстан, Чечня ветерандары ойошмалары бар бит, ниңә 1969-1972 йылдарҙа ғәрәп илдәрендә хәрби хәрәкәттә ҡатнашыусылар ойошмаһын булдырмаҫҡа?

Мысырҙа булған дүрт кеше беҙҙең дивизионға ла эләкте. Береһе, Мәскәү егете Жаворонков хаҡында алдараҡ яҙғайным инде. Ул сит илдә дүрт ай ғына булған. Ә бына Минск өлкәһенән Анатолий Смолик атлы егет бер йыл буйы йәһүдтәргә ҡаршы һуғышҡан. Ул "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены менән бүләкләнгәйне. Ғәрәптәр совет яугирҙәренә Америка доллары менән аҡса түләгән булған. Анатолий, 800-ләп доллар аҡсам бар, тип һөйләй торғайны. Был ул заман өсөн бик ҙур сумма ине бит. Совет ғәскәрҙәрен Ҡара диңгеҙ аша хәрби караптарҙа алып баралар. Һалдат-офицерҙар граждандар кейемендә була. Улар үҙҙәре лә ҡайҙа барғанын белмәй, сер шул тиклем ҡәтғи һаҡлана.

Әле был ваҡиғалар бер кем өсөн дә сер түгел. Бөгөн әрмелә С-75, С-125 зенит-ракета системалары юҡ. Сөнки улар күптән инде мораль һәм техник яҡтан иҫкергән. Зенит-ракета ғәскәрҙәре хәҙер өряңы тәғәйенләнеше лә, ҡеүәте лә күпкә юғары булған С- 300, С- 400 системалары менән ҡоралланған.

Йыл һайын апрель айында ПВО йәки һауа һөжүменән һаҡланыу ғәскәрҙәре көнөн байрам итәм. Былдай тәғәйенләнештәге ғәскәрҙәр Совет армияһында Бөйөк Ватан һуғышы алдынан барлыҡҡа килә. Беҙ хеҙмәт иткәндә ул айырым ғәскәри төр ине. Уның составына ракета-зенит һәм радиотехника ғәскәрҙәре, истребителдәр авиацияһы инде. Улар, башлыса, сик буйҙарында урынлашҡайны. Дошман авиация йәки ядро ҡоралы менән һөжүм итһә, зенит-ракета дивизиондары авиация менән берлектә уларҙың тәүге эшелонын, йәғни беренсе линияһын юҡ итергә тейеш ине. Дивизионда ике комплект ракета бар. Шуларҙы атаһың да - вәссәләм. Дошман самолеттарының икенсе эшелоны дивизионды юҡ итә. Беҙ, ысын мәғәнәһендә ил ҡалҡаны сифатындағы ғәскәр, һуғыштың тәүге сәғәттәрендә үк һәләк булырға тейеш инек. Шуғалыр ҙа инде, зенит-ракета частәрендә иҫке СКС карабиндарынан һәм ҡул пулеметтарынан башка ҡорал булманы.

90-сы йылдарҙа архив материалдарынан "секретно" грифы алынғас, ил йәмәғәтселегенә, журналистарға иҫ киткес мәғлүмәттәр асылды. Баҡтиһаң, ПВО ғәскәрҙәре хәрби бурысын Кубала, Вьетнамда, Африкала һ.б. илдәрҙә үтәгән. Әйткәндәй, беҙҙең дивизионда 1962-1963 йылдарҙа Кубала хеҙмәт иткән Мазаев фамилиялы бер сроктан тыш хеҙмәт итеүсе старшина бар ине. Ул был хаҡта әллә ни һөйләп барманы. Ул мәлдә һирәк осрай торған "Волга" машинаһына күрһәтеп: "Мин быны Кубанан ҡайтҡас, һатып алдым", тип әйткәне иҫемдә.

Йыл һайын һауа десантсылары йәиһә сик буйы һаҡсылары үҙ байрамдарын үткәрә. Был осрашыуҙарға рәсми төҫ бирергә тырышһалар ҙа, шыма ғына үтмәй улар. Әскелек, хулиганлыҡ күренештәре булғылай. Былары, кем әйтмешләй, ваҡ мәсьәлә. Десантсылар һәм пограничниктар хәрби хеҙмәттә ныҡынған дуҫлыкты, ғәскәри берҙәмлекте яңырта, тоғролокто күрһәтә. Шуныһы мөһим. Зенит-ракета частарында хәрби бурысын үтәүсе запастағы яугирҙәрҙең дә быға хоҡуғы барҙыр бит.

## Ҡыҙҙар һәм "диссидент"

Әрменән ҡайтҡан ағай-эне мактанырға яратыусан, имеш, көн аша "самоволкала" йөрөнөм, араҡыны биҙрәләп эстем, ҡатын-ҡыҙҙарҙы етәрлек күрҙем һ.б. Бәлки кемгәләр шундай "бәхет" татығандыр ҙа, әммә мин бындай "рәхәтлектәрҙе" күрмәнем. Тәртип ныҡ булған, хәрби әҙерлек тейешенсә алып барылған, командирҙар эште ойоштора белгән урында былдай шуклыктар һирәк осрай ул. Ауыҙ тултырып батырлыктары хаҡында һөйләүселәргә ышанмайым мин.

1972 йылды ҡаршылағанда беҙгә педучилище ҡыҙҙары килде. Шулар биҙәп ултырттыҡ. Өҫтәлгә сәй, тәмлекәстәр ҡуйҙыҡ. Араҡы-шарап тигән нәмә юҡ. Уйын-көлкә, йырбейеү. Валя исемле ҡыҙ менән бер өҫтәлгә тура килдек. Танышып-һөйләшеп киттек. Брест өлкәһенән ине. Һуңынан ике тапҡыр ятағына барҙым. Һөйләшеп ултыраһың да - казармаға, отбой ваҡыты етә. Бына шул. Юҡһа, ҡайһы берәүҙәр Казанова була ла китә. Имеш... әҙерләп ҡуйғандар ти унда!

70-се йылдарҙа "диссидент" һүҙенең мәғәнәһен аңлаусылар бик һирәк булғандыр. Шулай ҙа йәмғиәттәге ризаһыҙлыктар әрмелә лә тойола ине. Көнбайыштағы тормошто "иректе донъя" тип мыҫкыллап йөрөттөләр. Был "донъя", айырыуса, йәштәргә оҡшай ине.

Бер ваҡыт дивизионға бригада штабынан ике подполковник килеп төштә. Береһе - сәйәси хеҙмәткәр, икенсеһе - особист, йәғни махсус бүлек кешеһе. Тәүҙә улар беҙҙең командир - подполковник Меркунов һәм уның сәйәси эштәр буйынса урынбаҫары майор Савчук менән оҙаҡ ҡына кәңәшләштеләр. Бер аҙҙан ҡайһы бер сержант-һалдаттарҙы берәм-берәм саҡырта башланылар. Баҡтиһаң, уларҙың маҡсаты - мәкерле дошманды фашлау икән. Был "дошман" тигәне йәһүд егете Аппель булып сыкты. Уның тумбочкаһын тентеп шәхси әйберҙәре араһынан ниндәйҙер яҙмалар тапҡандар, имеш. Ул "Радикаль йәштәр союзы" тигән йәшерен ойошма төҙөүҙе планлаштырған, йүнәлешле маҡсаттары ла булған.

Аппель - әрмегә Житомир ҡалаһынан саҡырылған студент. Ниндәйҙер сәбәп буйынса институттан ҡыуылғас, армияға алғандар. Үҙен ни хәрби әҙерлектә, ни спортта күрһәтә алмаған ялҡау, ихтыярһыҙ ине, гел сираттан тыш наряд алып йөрөнө. Һуңынан уны икенсе урынға күсерҙеләр. Үтә секретлы булған беҙҙен часта уға урын юҡ ине. Заманаһы шундай булды бит. Хатта сит ил музыкаһын тыңлаған өсөн дә кешене иркенән мәхрүм иткән осраҡтар була торғайны. "Антисоветчиктар" менән көрәшеү шауҡымы әрмене лә урап үтмәне.

## "Атай-командирҙар" һәм "бабайсылыҡ"

Беҙ хеҙмәт иткән осорҙа совет ҡоралло көстәрендә бер мөһим ваҡиға булды. Үҙ ирке менән хеҙмәт иткән сержант-старшиналарҙың күбеһе ҡыҫкартылды. Хеҙмәттә ҡалыусыларға прапорщик, флоттағыларға мичман дәрәжәһе бирелде. Беҙҙең дивизионда ла сроктан тыш хеҙмәт итеүселәр бар ине. Береһе - медфельдшер, икенсеһе - хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнә, өсөнсөһө - механик, дүртенсеһе - идара взводында кемдер. Әлбиттә, 30 һалдат-сержантка унлап үҙ теләктәре менән хеҙмәт итеүселәр күп, етмәһә, офицерҙары ла бар бит әле. Бахырҙар, ни менән шөғөлләнергә белмәй, көн уҙғара алмай интегә ине. Старшина механик Маркин ҡайһы сакта көнө буйы шәхси машинаһы менән булыша, йә өйөнә ҡайтып китә. Дивизион командиры саҡырта ҡалһа, тәүҙә ҡулын терһәгенә тиклем майға буяй, шунан ғына штабка йүнәлә. "Бына бит, иптәш командир, гел эштә, хатта ҡул йыуырға ла ваҡыт юҡ", тигәнде аңлата ине был. "Атай-командирҙарҙың" ҡайһы берҙәре бына ошолай хеҙмәт итте.

Әле ни өсөн әрмелә тәртип аҡһай, "бабайлыҡ" хөкөм һөрә, эскелек, наркомания сәскә ата тиһегеҙ? Минеңсә, унда майор Савчук кеүектәр аҙ. 90-сы йылдарҙа әрменең умыртка һөйәге - офицерҙар корпусы тарҡалды, кемдер коммерцияға күсте, кемдер отставкаға китте. Проблеманың икенсе яғы ла бар - кесе командирҙар әҙерләү кимәле түбәнәйҙе. Уҡыу подразделениеларында хәрби һөнәргә генә өйрәтәләр, ә илде яратырға, ысын патриот булырға түгел. Акса өсөн генә әрмегә барған контракттағы сержанттарҙан нимә көтөргә мөмкин инде?

Шуныһы һөйөндөрә, әрмеләге хәл йәйлап ҡына булһа ла ыңғай йүнәлеш ала башланы. Шулай ҙа, беҙ хеҙмәт иткән осорҙағы ҡеүәтле, берҙәм һәм еңелмәҫ Совет Армияһы кимәленә етеү өсөн ең һыҙғанып байтаҡ эшләйһе лә, эшләйһе әле.

## "Үҙемдең пулеметты алайыммы?"

1972 йылдың майында подполковник Меркуловты, мине һәм сержант Ковалде Львов ҡалаһына "молодойҙар" артынан ебәрҙеләр. Саҡырыу пункты ниндәйҙер бер ҡәлғәлә урынлашҡайны. Яйлап буласаҡ һалдаттар йыйыла, беҙ нарядка йөрөйбеҙ. Ҡәлғә стенаһының бер өлөшө емерелгән ине. Мине шул урынға һаҡҡа ҡуйҙылар. Призывниктарҙы оҙатырға килгән ата-әсәләрҙе, егеттәрҙең дуҫ-иштәрен ошо тишек аша үткәрмәҫкә тейешмен. Еңелдән түгел был бурыс. Ҡыҙмаса булып алған әҙәмдәрҙе туктатырмын тимә, ябырылып баралар. Ҡаршылыҡ күрһәтеүгә өнәп етмәнеләр. әзмәүерҙәй бер ир: "Нимә, һалдат, үҙеңдең ҡайҙа икәнеңде белмәйһеңме ни? Ярай әле урыҫ түгелһең, юҡһа күрмәгәнеңде күрһәтер инек", тигәс, ҡул һелтәнем - керһендәр әйҙә. Көнбайыш Украинала Совет Армияһына ғына түгел, тотош Совет иленә бына ошондай ҡараш ине.

Призывниктарҙан 90 егет йыйылды. Улар - буласаҡ хәрби водителдәр. Аралашып киттек. Бер ҙә яуыҙ түгелдәр икән. Горилка, сало менән һыйланылар. Бер шаянырағы: "Сержант, хеҙмәткә үҙемдең пулеметты алайыммы, әллә часка барғас, үҙегеҙ бирәһегеҙме?", тигәс, һис аптыраманым. Был төбәктәрҙә милләтселәрҙең 50-се йылдарға хәтлем совет власына ҡаршы ҡоралло көрәш алып барыуҙары үҙен һаман һиҙҙерә ине.

Егеттәрҙе Березово ҡаласығында урынлашкан бригада штабына тапшырғас ҡына, тын алыуы еңеләйеп китте. "Хай живи, Украина!" Тик һәйбәт кенә хеҙмәт итегеҙ!

**Шулай итеп...**

**Дембелгә әҙерләнәбеҙ. Фотоальбом төҙөнөм. Парад формаһына "Отличник Советской Армии", "Специалист I класса", "Спортсмен - разрядчик" значактарын һәм комсомол значогын матурлап тағып ҡуйҙым. Беҙ 1973 йылдың 18 майының иртәһендә Лида ҡалаһындағы бригада штабында инек. Ғәҙәттә, беренсе төркөм дембелдәрҙе тантаналы рәүештә оҙаталар. Ул мәлдә лә шулай булды. Беҙҙең алдан строевой аҙым менән бөтә бригада үтте. Частең Ҡыҙыл байраған үбеп әрме менән хушлаштыҡ. Һау бул Белоруссия! Изге күңелле белорустар, дуҫтар-хеҙмәттәштәр! Бәлки ошо бәрәкәтле ергә яңынан килергә яҙыр әле!**

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ.**

**(Аҙағы. Башы 3-4 һандарҙа).**

✓ **Ҡумыҙсыларҙың һәм өҙләүселәрҙең 1 Асыҡ республика конкурсы 2007 йылдың 2-7 мартында Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ҡасабаһында үткәреләсәк.**






# Мин йәшәп туймаç инем!

## Ун алты йәшлек үҫмер көндәлеге

Вәхиткә был һүҙҙәр шул тиклем ныҡ тәьҫир итте, хатта ул шатлығынан ни эшләргә лә белмәйенсә, һүҙһеҙ, йылмайған килеш торҙо. Начальниктың һүҙҙәре уға шундай яғымлы, шундай матур булып, ысындан да ҡанатландырып, йәшәүгә артыҡ көс биреп яңғырай ине:

- Ҡурҡма, һин белемһеҙ ҡалмаҫһың. Фәндең иге-сиге юҡ. Тик эш шунда:барыһынан да бигерәк, көслө ихтыяр, тырышлыҡ, үҙеңдең янып торған йөрәгең кәрәк. Авиация - кешелек донъяһының иң алдынғы сафында торған фәндәрҙең береһе. Теләйһең икән, һиңә бөтә академияларҙың ишеге асыҡ. Беҙгә кешеләр һәр ҡайҙа ла барыһынан да ҡиммәт һәм ҡәҙерле. Килер бер ваҡыт: бына һин беҙгә "мине ысын тормош юлына баҫтырыуығыҙ өсөн рәхмәт" тип әйтерһең. Шулаймы?

Вәхит йылмайып:

- Шулай, - тине.

Ул гәҙәттән тыш янды, ҡанатланды һәм шатланды бөгөн. Сөнки ул үҙенең тормош юлының бейек баҫҡысынан тағы бер яңы баҫҡысына атланы. Тағы бер ынтылыш! О, ни тиклем күп баҫҡыстарға артылмаған әле!..

Ысындан да, Вәхиткә тормошта йоҡларға түгел, ә янырға, янырға, көрәшергә, уның ошо ҙур көрәш ҡаҙанында ҡайнарға кәрәк! (Шундағына һин сей ҡалмайһың). Эйе, ысындан да,тормоштоң башланмаған ғүмере, бер ҡасан да бөтмәҫ ҡайнар көрәш тарихы бар...

**13 март**

Вәхит бөгөн экипажда беренсе булып зонаға осто. Ләкин иң ҙур крен яһап һәм киҫкен газ биреп, уңышһыҙлыҡҡа осраны. Етмәһә, иплән ҡарамағанлыктан, беренсе разворот яһағас уҡ, муйынына ураған шарфы ысҡынып, бер туктауһыҙ әле күҙгә, әле козырекка һуғылып, елферләп йөрөнө. Тик 800 метрҙан 1000 метрға тиклем күтәрелеп, зонаға сыҡкас ҡына Николаев Вәхиттең самолет менән дөрөҫ идара итеүенән ҡәнәғәтләнә алды. Вәхит үҙе лә балаларса шатлана һәм үҙенең инструкторының шланг аша килгән һүҙҙәрен йылы ҡабул итә ине.

- Горизонт, горизонт... Бына шулай... Хәҙер 90 градуска поворот! 180 градуска поворот, ориентирыңды юғалтма. Бына шулай, отлично...

Ләкин Вәхитте хәҙер был "отлично" ғына ҡәнәғәтләндерә алманы. Ул шул тиклем күп күнекмәләр эшләргә теләй, хатта ул көн буйынса осорға ла риза ине.

Вәхиттән һуң Василенко һәм Мәхмүт осто. Башка зонаға осоусылар юҡ ине. Хәҙер яңы күнекмәләр башланды. Вәхиткә әле алтынсы булып ҡына осорға кәрәк ине. Ул квадратҡа ҡар өҫтөнә килеп ултырҙы ла, сумкаһынан энә, еп алып, икенсе осоуҙа шарфтары елферләп тормаһын өсөн, комбинезонының асыҡ урындарын тегергә тотондо. "Ярай әле, бында Сәғит энәләрен һалып ҡуйған", - тип уйланы ул.

Вәхит бөгөн күккә икенсе ҡабат күтәрелде инде. Был юлы барыһы ла уңышлы сыкты.

- Тағы бер круг яһайыҡ әле беҙ һинең менән! - тип, Николаев моторҙы туктатмайынса старт һорап ҡулын күтәрҙе.

- Өшөмәйһеңме? - тине ул Вәхиткә.

- Юҡ, юҡ, иптәш инструктор! - тип ҡысҡырҙы Вәхит шатлығынан... Самолет өсөнсө ҡабат күккә атылды. Аэродромдан иң аҙаҡҡы китеүсе кеше Вәхит булды бөгөн. Сөнки кабинанан сыҡкас уҡ дежурный уны стартерҙы алыштырырға ҡушты. Стартер - аэродромда иң яуаплы һәм етди эштәрҙең береһен үтәүсе ул. Уға бөтә самолеттар буйһона һәм уға бөтә летчиктар ҡарап эш итәләр. Вәхиткә был эш бик күңелһеҙ тойолһа ла, осоуҙар бөткәнсе уға был хеҙмәтте үтәргә тура килде.

Обед ашағандан һуң, ат көтөп тормайынса, ул үҙе генә ашығып ҡайтып китте.

(Урамда ....ты күреү, яңы тойғолар).

Вәхит ҡайтып кергәндә, барыһы ла ял булыуҙан файҙаланып, йоҡлап ята, ә бер-нисә малай шахмат уйнап ултыра ине. Библиотекала эштәр күбәйеп киткәнлектән, ул ҡайткас уҡ шунда төштө. Библиотекаға яңы китаптар алдырғайнылар.

**14 март**.

"Нисек тә сочинениены бөгөн яҙып бөтөрөргә кәрәк", - тип уйланы Вәхит һәм арҡаһына шинелен һалған, башына фуражкаһын кейгән килеш, ҡағыҙҙар араһына батты. Кочегарка һыуыҡ һәм бер аҙ дымлы ла ине. Ләкин Вәхит бер ҡасан да үҙенә шунан башҡа "тыныс кабинет" таба алғаны юҡ ине әле. Бында уға бер кем дә ҡамасауламай, бер кем дә шаярмай, тып-тын.

Ләкин бөгөн "кабинет"та ҡыҙыҡлы хәл килеп сыкты. Вәхит бер ни ҙә һиҙмәй ултыра ине, эргәһендә:

- Бәй, минең писателем бында ни эшләп ултыра?! - тигән тауышҡа ҡапыл һиҫкәнеп китте. Уның алдында, йылмайып, Юзифа Матвеевна баҫып тора ине.

- Нимә яҙаһың һуң? - тине ул.

- Сочинение. Юбилейға арналған сочинение.

- Ә ниңә һуң бында?

- Бында барыһынан да яҡшы.

- Бына һиңә яҡшы урын! Ҡара әле үҙеңә: төрмәләге тоткон кеүекһең бит!

- Бит үҙегеҙ мәктәптә ҡалырға, һуңларға рөхсәт итмәнегеҙ. Ләкин миңә һәр ваҡыт яҙырға кәрәк. Ә бынан башҡа хәҙер урын да юҡ.

Юзифа Матвеевна Вәхиттең был һүҙҙәренән һуң тағы йылмайып, бер аҙ ҡарап торҙо ла әсәләрсә йылы тауыш менән:

- Ултырма һин, Ғәлимов, бында. Күрәһеңме ниндәй һыуыҡ, сырость... Бар минең кабинетка: телегәнсә яҙ! Яҡты ла, йылы ла, күңелле лә булыр, - тине. - Только бер кемде лә индермә, сыкканда, биклән сыҡ.

Вәхит дирекцияла яңғыҙ ғына рәхәтләнеп, бик оҙаҡ ултырҙы. Сочинение яҙылып бөтмәне әле.

**15 март**.

Сочинение ошо һүҙҙәр менән тамамланды:

Батырҙарын -
Бөйөк эше өсөн -
Халыҡ хаҡһыҙ
Онотоп ҡалырға.
Ватан өсөн
Ғүмерен биргән икән -
Үлем юҡ ул
Беҙҙә батырға.
Улар илткән
Еңелеү белмәҫ байраҡ
Музейҙарҙа
Бөгөн һаҡлана.
Тишкеләнгән,
Ҡанға йөҙөн йыуған...
Һәр кем ҡарап
Уға һоҡлана.
Батыр ҡаны,
Уның үлмәҫ даны
Нурын сәсер
Мәңге үҙенең.
Ҡайнар тоҡом
Уның исемен һаҡлар,
Батыр йәшәр,
Халыҡ - үлемһеҙ!

Сочинение тапшырғандан һуң Вәхит Тайфа менән мәктәптән сыҡты.Вәхит Тайфаға үпкәләп:

- Шулай итеп, көндәлегеңде бабайыңа ла укытмайһың инде! - тине.

- Юҡ шул!... Ярамай.

- Шиғырыңды ламы?

- Уны иртәгә...

**16 март.**

Бөгөн Тайфа көндәлеген дә, шиғырын да килтермәгәйне.

- Их, Тайфа, миңә лә укытмаҫка ни хаҡың бар? - тип асыуланды Вәхит.

- Ҡайҙа, Вәхит, нимә яҙаһың һуң үҙең, күрһәт әле...

- Юҡ, ярамай. Үҙең укытмаýың, мин дә шулай уҡ...

Вәхит яҙып ултырған ошо дәфтәр битен ябып ҡуйҙы.

- Ярай, хуш әләһең. Мин ҡамасаулайым булһа кәрәк... тип, Тайфа кластан сығып китте.

Бына Вәхит "Пилот яҙмалары"ның һуңғы биттәрен яҙа. Бына ҡәҙерле мәктәп, ҡәҙерле класс, ҡәҙерле парталар... Ниндәй күңелле шулай дәрестәрҙән тороп ҡалып, янып йәшәүе! Мәктәп!.. Вәхиттең мәктәптәге иң яраткан укытыусыһы Мөсәлиә Ғәлиевна! Кластағы иптәштәр!

Һеҙҙе ҡалдырып китеү Вәхит өсөн ни тиклем ауыр, ни тиклем ҡыйын буласаҡ! Ни тиклем!.. Мәктәп! Бер ҡасан да онотмаҫ һине Вәхит. Һинең ошо парталарыңда ул ни тиклем белем алды һәм ни тиклем әле яулап алынмаған тормош юлдарын күрҙе.

Вәхиттең ҡәҙерле укытыусыһы!.. Һине ул мәңге, мәңге онота алмаҫ. Сөнки һин уға йәшәр өсөн, ижад итеп йәшәр өсөн иң ҡәҙерле тормош аҙығын бирҙең!..

Онотмаҫ ул һине!..

Авиация!..

Алда икһеҙ-сикһеҙ юлдар!.. Шундай йәшәү гүзәл! Шундай гүзәл ул! Шундай гүзәл ул!

Һәй ошо йәшәүҙе,

"Һәй ғүмерҙе,

Һәй халыҡты,

Һәй халыҡтың донъяһын!"

**(Бөттө. 16.03.49. Мәктәп).**

**Зөһрә БУРАҠАЕВА әҙерләне.**

### БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!

**Ер йөҙөндәге боронғо тарихлы бик күп халыҡтарҙа ҡумыҙ сиртеү сәнғәте һаҡланған. Ул донъя мәҙәниәте сәнғәтендә сағыу бер күренеш булып тора. Ҡумыҙ сыңына һәр халыктың күңел моңо һалынған, бәлки, шуғалыр ҙа, уның үҙенсәлекле яңғырашы тарих төпкөлөндә ҡалған дәүерҙәрҙе тоташтыра һымаҡ....**

# Ыҡтамаҡ ере...

## ҡумыҙсыларҙы һәм өҙләүселәрҙе йыя

Был үҙенсәлекле сәнғәт төрөн юғалтмау, донъя кимәлендә танытыу, үҫтереү, киләсәк быуындарға тапшырыу маҡсатында халыҡ-ара фестивалдәр үткәрелеп тора. Мәҫәлән, Австрияла, Норвегияла һәм Европаның башҡа илдәрендә үткәрелгән халыҡ-ара фестивалдәрҙә Башкортостан ҡумыҙсылары һәр саҡ юғары кимәлдә сығыш яһап, лауреат исеме яулап ҡайта.

Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығы саралары сиктәрендә, "Башкортостан халыктары" республика программаһын тормошка ашырыу маҡсатында, башҡорт халыҡ милли музыка ҡоралдарын аяҡҡа баҫтырыу, һаҡлау, уларҙа традицион башҡарыу оҫталығын үҫтереү, талантларҙы табыу, йәш быуынды башҡорт инструменталь музыка ижадына йәлеп итеү, ҡумыҙ сиртеү һәм өҙләү сәнғәтен пропагандалау маҡсатында ҡумыҙсыларҙың һәм өҙләүселәрҙең 1 Асыҡ республика конкурсы үткәреләсәк.

Ойошторусылары - Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Мәсетле муниципаль район хакимиәте.

Ҡумыҙсыларҙың һәм өҙләүселәрҙең 1 Асыҡ республика конкурсы 2007 йылдың 2-7 мартында Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ҡасабаһында үткәреләсәк.

Конкурста айырым солистарҙан тыш, ҡумыҙсылар ансамблдәре лә ҡатнаша. Ул 16 йәшкә тиклемгеләр һәм 16 йәштән өлкәндәр ҡатнашлығында ике турҙа үтәсәк.

Ә өҙләүселәр конкурсы 16 йәштән өлкәнерәктәр араһында үтә. 1 турҙа: музыкаль оҙатыуһыҙ башҡорт халыҡ оҙон көйө йәки бейеү көйө башкарыла; импровизация. II тур шарттары ла шул уҡ, ләкин унда беренсе турҙа башкарылған көйҙәр ҡабатланмай. Конкурсант башҡарған көйөнөң тарихын йә риүәйәтен белергә тейеш. Конкурсанттың һирәк башкарылған көйҙәр менән сығыш яһауы хуплана. Ҡатнашыусы шулай уҡ бер әҫәрҙе фонограмма ярҙамында (минус) башҡарыу хоҡуғына эйә.

Конкурсанттарға ярҙам итеү маҡсатында 1 марттан 3 мартка тиклем РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, халыҡ ҡумыҙсыһы, музыкант Роберт Заһретдинов, ҡумыҙсыларҙың республика, халыҡ-ара конкурстар һәм Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты Миңлеғәфүр Зәйнетдинов мастер-класс үткәрәсәк.

**Ғаризалар 2007 йылдың 20 февраленә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә:**

**450077, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 72. Республика халыҡ ижады үҙәге. Телефон: (22) 72-36-50, 72-06-83, факс: 72-53-25.**

**452550, Мәсетле районы, Оло Ыҡтамаҡ ҡасабаһы, Ленин урамы. 19, Мәҙәниәт йорто. Телефон: (270) 2-16-55, 2-24-92, факс (270) 2-24-92.**

**(Аҙағы 16-сы биттә).**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# БЕР ҠЫЙЫҠ БАШЫ...

## ике төрлө донъя



**"Тураһын әйтеп туғаныңа ярамағанда кинәйәләп әйтеү, берәй фәһемле ваҡиға йә тарих һөйләү, ишаралау күпкә отошло", тигәйнек үткән һандағы "Кинәйәне киңәтеп" рубрикаһында. Туғанға ярап була ул. Бушҡамыни, "Ике туған талаша, атка менһә, яраша", тиҙәр. Туғандың тура әйткәнде ҡабул итеренә, һис юғы, үпкәләгән хәлдә лә, ғәфү итеренә ышанғанға, беҙ туғандарыбыҙҙы йышыраҡ рәнйетәбеҙ ҙә инде.**

Ә бына таныш булмаған кешегә, йәғни туған булмағанға тураһын бәреп ҡара: һөҙөмтәһе һин көткәнсә булмауы ихтимал. Аңлашылмаусанлыктар, ҡапма-ҡаршылыҡтар, хатта дошманлашыу шуның арҡаһында килеп сыға түгелме? Һүҙ кешенең берәй етешһеҙлеген күҙенә бәреп әйтеү тураһында барғанын аңлағанһығыҙҙыр. Ә бына кешенең ыңғай яҡтарын күреү ике яҡ өсөн дә файҙалы. Күреү, әммә шаштырып маҡтау түгел. "Кешене юкка сығарам тиһәң, уны бер туктауһыҙ маҡта", тип бушҡа әйтмәйҙәр бит.

Тимәк, үҙ-ара мөнәсәбәттә тура һүҙлелек һәр саҡ ыңғай һөҙөмтә бирмәй, ул проблеманы хәл итеүгә ҡарағанда, киреһенсә, көрсөккә алып килеүе ихтимал. Ә бына тәү ҡарамаҡҡа бер ниндәй логикаға ҡоролмаған кинәйәләр, мәсәлән, кешене уйланырға мәжбүр итә. Улар һинең ҡулыңа әҙер рецепт тоттормай, теге йәки был хәл-ваҡиғаның сиселешен үҙең уйлап табырға һәм ҡарар ҡабул итергә тейеш булып сығаһың. Шул саҡ оҙаҡ ваҡыт таба алмай йөрөгән яуап "ҡылт" итеп өҫкә ҡалҡып сыға, хатта ҡай саҡ үҙең дә аптырап ҡуяһың. Психологияла был күренеш инсайт, йәғни һиҙгерлек, берәй нәмәнең асылына ҡапыл төшөнөү, тип атала.

Мәсәлән, бер кеше оҙаҡ ваҡыт бер аяғында баҫып тора, ти. Һыңар аяҡта оҙаҡ торһаң, ул аяҡ арый, быуындар һыҙлай башлай. Кеше бына-бына хәле бөтөп ҡоларға тейеш. Әлбиттә, ул башкаларҙан ярҙам һорай. Ярҙам итергә ашығыусылар оҙаҡ көттөрмәй. Берәү һыҙлаған аяҡҡа массаж яһай башлай, икенсеһе ҡолаҡ артына энә ҡаҙарға тәҡдим итә. Йәнәһе, шулай иткәндә, аяҡ тарамыштары яҙылаҫаҡ. Өсөнсө кеше уның ҡолап барыуын шәйләп, таяныс ҡулын һуҙа. Был хәлде ситтән күҙәтеүселәр һыңар аяғында торған кешене йәлләй, таяныс ҡулын һуҙған кеше менән һоҡлана. Шул саҡ аҡыл эйәһе лә табыла. "Бер аяғында баҫып торған ике аяғы ла булмаған кешегә ҡарағанда күпкә бәхетле", - ти ул, бөтәһе лә ишеткәндәй итеп. Былар эргәһенән үтеп барыусы: "Һин үҙеңде һығылмалы пружина кеүек көҙ алдына килтер. Бар ихтыяр көсөңдө туплап, уйыңды ошо йүнәлешкә туплала, һыҙланыуың шундуҡ бөтөр", - тип кәңәш бирә. Үҙ ғүмерендә күпте күргән берәү: "Иртәгә һыҙлау үҙенән-үҙе бөтәсәк", - ти, иҫе китмәй генә. Ниһайәт, һыңар аяғында торған бахыр эргәһенә тағы берәү килә. "Ниңә һыңар аяғыңда ғына тораһың? - тип һорай ул. - Икенсе аяғыңды ҡуйһаң, һинең бит икенсе аяғың бар"...

Үткән һандарҙағы кинәйәләр дини темаға ҡағылғайны, был һанда донъяуи хәл-ваҡиға тәҡдим итәбеҙ. Кинәйә беҙҙән - киңәйтеү һеҙҙән.

**Шулай итеп...**

**Ҡыйыҡ башындағы баҡсала ике ғаилә йәшәй. Яратҡан килене менән ғәзиз улының бер-береһенә һыйынып ҡына йоҡлауҙарын күргән әсәй кеше быйдай хәлгә тыныс ҡына ҡарай алмай. Ахырҙа, улы менән киленен йоҡоларынан уятып, ҡысҡырып ебәрә: "Бынауындай әҫәлә һеҙ нисек бер-берегеҙгә һыйынып ятаһығыҙ? Был һеҙҙең һаулығығыҙға зыян килтерә!"**

**Баҡсаның икенсе осонда ҡыҙы менән яратҡан кейәүе йоклай. Улар, киреһенсә, бер-береһенән айырым ята. Әсәй кеше уларҙы иркәләп кенә уята ла: "Ҡәҙерлеләрем, бынауындай һалҡын төндә һеҙ ниңә улай айырым ятаһығыҙ? - ти ул. - Бер-берегеҙгә һыйынып ятығыҙ".**

**Әсәй кешенең был һүҙҙәрен ишеткән килене, доға уҡығандай, ҡулдарын өҫкә күтәреп: "Эй, Хоҙайым, һинең ҡөҙрәтең шул тиклем киң: ҡыйыҡ башында бер баҡса, ә унда ике төрлө климат", - ти әсенеп.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

**Тирә-йүндәге кешеләргә иғтибар итегеҙ әле! Төҫкә-башҡа бер-береһенә ике тамсы һыу кеүек оҡшағандарҙы беҙҙең арала табыуы бик ауыр. Әҙәми заттарҙың тышҡы яҡтан төрлө-төрлө булыуы үҙе үк мөғжизә бит! Аллы-гөллө ялан сәскәләренә һоҡланған кеүек, бер-беребеҙгә ҡарап туйырлыҡ түгел. Кеше тышҡы йөҙө менән түгел, эске күңеле, холоҡ-фиғеле менән дә мауыҡтырғыс айырым бер донъя ул. Уның серҙәренә, айышына төшөнөп бөтөрлөк түгел. Күп осраҡта хатта үҙ-үҙеңде аңлауы ауыр.**

# Эшҡыуар
## сүп һауытында ни эҙләй?

Мәсәлән, мин халыҡ менән тулы транспорттан, кеше күп йыйылған урындарҙан, тәҙрәһеҙ бүлмәләрҙән ҡуркам. Бәләкәй сактан сәсемде йыйып йөрөргә яратмайым, берәй нәмә яҙырға ултырһам, бармаҡтарым менән сәсемде тарап бер булам. Нисек кенә үҙемде тоторға тырышһам да, ултырғанда һәр саҡ аяғымды һелкетәм. Йоҡлап алмай йонсоһам, баш бармағымды ауыҙыма ҡабыуым була, шунда уҡ ойоп китәм. Бер кем дә сәйер ғәҙәттән азат түгел. Быуа минең һеңлем бәләкәйерәк сағында простыняның ике мөйөшөн танау тишектәренә тыҡмайынса, йоҡламай торғайны. Ул уны "тыҡҡысым", тип йөрөттө. Тик бер үк простыняны ғына ошо маҡсатта ҡулланды, ҡайҙа барһа ла уны үҙе менән алды. Танауыңдың тишектәре ҙурая, тип ҡурҡытыу ҙа уны был ғәҙәтенән айырманы. Бахыр простыняның имен-аман ере ҡалмайынса, тетелеп бөткәс кенә ташланы был ҡылығын. Ә алты йәшлек ҡустым, арып китһә, әсәһенең йоҡо ҡылдан эҙләй башлай. Уны бик оҙаҡ еҫкәгәндән һуң ғына кейемде ҡосаҡлап, йоҡлап китә. Әхирәтемдең улын йоҡлатыу өсөн мотлаҡ арҡаһын тырнарға кәрәк.

Минең синыфташым ауырып китеүҙән ҡурка. Бәләкәй генә сикан сыҡһа ла дауаханаға йүгерә, үҙе менән һәр саҡ бер сумка дарыу һөйрәп йөрөй. Ә бергә эшләгән коллегам яңыраҡ гәзит-китапты тик бәрәфтә уҡырға яратыуын әйтте. Бәләкәй сағында ҡараутаттан осоп төшөп, ҡулын һындырған күрше ҡыҙы бына ике тиҫтә йылдан артыҡ иҙәндә генә йоҡлай. Эшҡыуар булып эшләүсе танышым сүп-сар һауыты эргәһенән тыныс ҡына уҙа алмай, мотлаҡ уның эсендә соҡонол китә.

Әлбиттә, сит ил иномаркаһында елдереүсе, ҡупшы кейемле йәш ирҙең сүп һауытында ҡаҙыныуы күптәрҙе аптырауға һалалыр. Әммә уның сәбәбе бар: мәктәпте бөтөп, ҡалаға уҡырға килгән сағында ул документтарын урлата. Шунан бирле уға юғалтҡан ҡағыҙҙары сүп-сар араһында аунай кеүек тойола башлай. Күңелһеҙ ваҡиғанан һуң күпме йылдар уҙыуына ҡарамаҫтан, был ышаныс ирҙе ташламай, ә ҡотолғоһоҙ, сәйер ғәҙәткә әйләнә.

Сәйер ҡылыҡтар кешене индвидуаль, ҡабатланмаҫлы. итә. Әгәр улар ҡалғандарға ҡамасауламай, тормошто ҡатмарландырмай икән, әйҙә,шулай сәйер ҡылыҡланып йәшәһен – ҡыҙыҡ бит. Ә һеҙҙең ниндәй сәйер ғәҙәттәрегеҙ бар? Яҙып ебәрегеҙ!



**Гөлнур ӘБУБӘКЕРОВА**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТАЯНЫР НӨКТӘ

**Маҡсатҡа табан барғанда хыялыңдың тормошҡа ашыуын көсәйтергә теләгәндәр, мәсәлән, мантрҙар менән эш итә ала.**

✦ Нимә һуң ул мантрҙар тиерһегеҙ. Ҙур төйөнгә тупланған көслө энергияны - мантрҙар тип атайҙар. Уны кеше аңын йыһандың юғары аңы менән тоташтырыусы көс тип әйтергә лә мөмкин. Бер уйлаһаң, уңыш яулау өсөн мантрҙарҙан да ҙур ярҙамсы юк. Уларҙы ҡабатлау ихтыяр көсөн нығыта, рухи көс һәм илһам өҫтәй. Был тормошта ниндәй генә маҡсат ҡуйма, мантрҙарға таянһаң, юлың уңыр. Мәсәлән, ҡыҙҙарға ул яратҡан кешеһенә кейәүгә сығырға, ә эшҡыуарҙарға бәрәкәт, яҡшы табыш алыу мөмкинлеген бирә. Ғәмүмән, киң билдәле миллионерҙарҙың һәр яңы проектын мантр-медитация ярҙамында яйға һалып байығыуы билдәле. Улар үҙҙәре лә быны йәшермәй.

✦ Мантрҙарҙы милләтенә, диненә ҡарамай, һәр кем файҙалана ала, тик ундағы һүҙҙәрҙең боронғо санскрит телендә яңғырауына ғына аптырарға ярамай. Ни өсөн тигәндә, тап ошо боронғо телдә мантрҙарҙың төп коды һалынған. Ул код аңды үҫтереп, кешенең юғары кимәлдә фекер йөрөтөү һәләтен нығыта. Икенсенән, мантрҙарҙы ҡабатлауҙы көндәлек тәжрибәгә әйләндерһәң, күңелең таҙарыуын, йәнең теләмәгән күренештәрҙән ситләшә башлауыңды тойорһоң. Шулай уҡ тәнең төрлө ҡош-корт итенән бешерелгән аҙыкты һәм иҫерткес эсемлектәрҙе ҡабул итмәй башлаясаҡ. Былар барыһы ла һинең төрлө яклап сафланыуыңа бер дәлил. Бер һүҙ менән әйткәндә, йән һәм тән сафлығына эйә булып, донъяға бөтөнләй икенсе күҙлектән баға башлауыңды аңлап, үҙең дә хайран ҡалырһың. Әгәр һин ысынлап та мантрҙар менән ҡыҙыҡһынаһың икән, шуны бел: уларҙы ҡабатларға яратасаҡһың һәм яратыуың бик оҙаҡҡа һуҙыласаҡ. Иң мөһиме, ышанырға һәм даими рәүештә үҙ тәжрибәңдә файҙаланырға кәрәк. Мантрҙар ысын күңеленән уңыш яуларға теләгән егәрле, тырыш, маҡсатлы кешеләргә генә ыңғай йоғонто яһай.

✦ Бөтөн мантрҙарҙы ла һигеҙ тапҡыр уҡырға йә кейләп йырларға кәрәк. Көйләп ҡабатлау иһә бигерәк тә яҡшы, сөнки көй тулҡындары мантрҙар энергияһын әүҙемләштерә.

**Бәрәкәт һәм уңыш мантраһы:**
Ом Хрим Клим Шрим Намаһ

**Бөтөн яңы башланғыстарҙа уңыш яулау мантраһы:**
Ом Намо Дханадайе Сваха

**Социаль уңыш ҡаҙаныу өсөн мантра:**
Ом Хрим Шрим Шрим Шрим Шрим Шрим Шрим Шрим Лакшми Мам Грахе Пурайе Пурайе Чинта Дурайе Дурайе Сваха.

✦ Бигерәк тә өр-яңы проекттар буйынса эш башларға уйлаған кешегә был мантрҙарҙы айына ике тапҡыр теүәл 108 тапҡыр ҡабатлау ҙа етә. Бөтөн уй-хыялдары бер айҙан, иң күбе өс йылдан ғәмәлгә аша башлаясаҡ. Өс йыл тигәндән ҡуркырға ярамай, сөнки мантрҙарҙың көсө кешенең кармаһына, аң кимәленә һәм ихласлығына ла бәйле.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Гәзитебеҙҙең тәүге һаны донъя күргәндән алып тоғро уҡыусыбыҙға, әүҙем авторыбыҙға, яҡын дуҫыбыҙға әүерелгән Баймаҡ үҙәкләштерелгән район китапханаһы селтәре директоры **Луиза Ҡаһарман ҡыҙы Дәүләтшинаны** ғүмеренең күркәм мәле - 50 йәшлек юбилейы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ.

Һеҙҙең ошо донъяла янып йәшәүегеҙ беҙҙе бәхетле итә, хөрмәтле Луиза Ҡаһарман ҡыҙы. Үҙегеҙ ҙә бәхетле булығыҙ!

**"Киске Өфө"ләр.**

1989 г.
01.50 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал.
03.25 "Криминальная Россия".
03.55 "Не ссорьтесь, девочки". Мелодраматический сериал.
05.35 "Обзор. Чрезвычайное происшествие".

## ПЯТНИЦА, 9 ФЕВРАЛЯ

### Первый канал

5.05 "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Малахов+".
10.20 "Вечный зов". 16-я серия. Историко-мелодраматический сериал.
11.20 "Детективы".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Лолита. Без комплексов". Ток-шоу.
13.20 "Понять. Простить".
14.00 Другие новости. Новости без политики.
14.30 "Контрольная закупка".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Вне закона". "Танец с ножами".
16.00 "Любовь как любовь". 225-я серия. Мелодраматический сериал.
17.00 "Федеральный судья".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Пусть говорят".
19.00 "Поле чудес". Телеигра.
20.00 "Чужие тайны". 2-я серия. Мелодраматический сериал.
21.00 Время.
21.25 "Розыгрыш". Юмористическая программа.
22.30 "Мужчина по вызову". Комедия. США, 1999 г.
00.10 "Огонь на поражение". Триллер. США, 1988 г.
02.10 "Моя девочка". Мелодрама. США, 1994 г.
03.50 "Дефективный детектив". "Мистер Монк и работник месяца". Комедийный сериал. США, 2004 г.

### БТВ-РТР

5.00, 5.23, 5.53, 6.23, 6.53, 7.23, 7.53, 8.23 "Доброе утро, Россия!"
6.15, 6.45, 7.15, 7.45, 8.15 "Местное время. Вести-Башкортостан".
8.45 "Мой серебряный шар". "Грейс Келли - принцесса Монако".
9.45 "Мусульмане".
10.00 "Опера. Хроники убойного отдела". "Счастливчик". Детективный сериал.
11.00, 14.00 Вести.
11.30 "Вести-ПФО".
11.50 "Опера. Хроники убойного отдела". "Слезы дракона". Детективный сериал.
12.50 "Ха". Маленькие комедии.
13.00 "Городок".
13.30 "Вся Россия". Телеочерки современной жизни: истории, судьбы, факты.
13.45, 16.40 Вести. Дежурная часть.
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.40 "Суд идет".
16.00 "Кулагин и партнеры". Детективный сериал.
17.00 Вести.
17.20 "Местное время. Вести-Башкортостан".
17.40 "Танго втроем". 5-я серия. Криминальная драма.
18.40 "Ангел-хранитель". 20-я серия. Мелодраматический сериал.
19.40 Вести. Дежурная часть.
20.00 Вести.
20.45 "Местное время. Вести-Башкортостан".
21.05 "Спокойной ночи, малыши!" Программа для самых маленьких.
21.15 "Юрмала". Международный фестиваль юмористических программ.
23.10 "Беспредел". Боевик. СССР, 1989 г.
01.15 "Контакт". Фантастический триллер. США, 1997 г.
04.00 "Дорожный патруль".
04.15 "Закон и порядок". Детективный сериал.
05.05 Канал EuroNews на русском языке.

### БСТ

**7.00 "Салям".**
**9.00 Новости (на башк. яз.).**
**9.20, 20.05 "Полезные новости".**
**9.30 "Площадь Испании". Мелодраматический сериал.**
**10.25 Мультфильм.**
**10.55, 18.05 "Йома". Нравственные ценности ислама.**
**11.15 "Соловьиная трель Башкортостана".**
**11.45 Фестиваль "Золотая юрта" М.Мардважиев "Жених и невеста". Спектакль.**
**13.05 "В простоте - величие".**
**14.00 "Хорошее настроение".**
**15.00 "Слепая свидетельница". Триллер.**
**16.35 "Песня жаворонка".**
**17.05 "Швейцарские робинзоны". Молодежный сериал.**
**17.30 "Приключения маленького принца". Мультсериал.**
**18.25 Народные мелодии.**
**19.00, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 Телеканал "Наш мир".**
**20.15 "Сэнгелдэк".**
**20.30 "Куласа".**
**21.00 "Райхан".**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**22.50 "Криминальный спектр".**
**23.05 "Невыносимая жестокость". Комедия.**
**По окончании: погода.**

### НТВ-4 (Орбита)

6.00 "Сегодня утром".
9.05 "Наше все!"
10.00, 13.00, 16.00 Сегодня.
10.25 "Авиаторы".
11.00 "Две правды".
12.00 "Я все решу сама-2". 2-я серия. Криминальная мелодрама.
13.25 "Улицы разбитых фонарей". Криминальный сериал.
14.30 "Жизнь - поле для охоты". 16-я серия.
15.30 "Обзор. Спасатели".
16.25 "Возвращение Мухтара". "Девятый маршрут". Детективный сериал. "Плюшевый Мишка сошел с ума".
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие".
19.00 Сегодня.
19.40 "Следствие вели...". "Дело автоматчиков".
20.35 "Шпионские игры. Месть". 2 части. Боевик. Россия, 2006 г.
22.30 "Полицейская академия-5: задание в Майами". Комедия. США, 1988 г.
00.15 "Иллюзия убийства". Триллер. США, 1986 г.
02.10 "Возвращение Мухтара". Детективный сериал.
03.45 "НЕ ссорьтесь, девочки". Мелодраматический сериал.

## СУББОТА, 10 ФЕВРАЛЯ

### Первый канал

5.40, 6.10 "Метель". Экранизация одноименной повести А.С. Пушкина. СССР, 1964 г.
6.00 Новости.
7.20 "Играй, гармонь любимая!"
8.10 "Дисней-клуб". "Русалочка", "Клуб Микки Мауса".
9.00 "Слово пастыря".
9.20 "Здоровье".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.20 "Смак".
10.50 "Спецрасследование". "Мурат Насыров. Две версии драмы".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Римская история". "Безумие Нерона".
13.20 "Зверинец".
14.00 Другие новости.
14.30 "Контрольная закупка".
15.00 "Доктор Курпатов".
15.50 "Детсадовский полицейский". Комедия. США, 1990 г.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Их разыскивает милиция".
18.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Максимом Галкиным. Телеигра.
19.50 "Властелин горы". Экстремальное шоу.
21.00 Время.
21.20 "Ненормальная". Мелодрама. Россия. 2006 г.
23.10 "Высшая лига".
00.30 Хоккей. Европейский тур. Сборная России - сборная Швеции. Трансляция из Швеции.
02.20 "Двойная рокировка-3". Боевик. Гонконг - Китай, 2003 г.
04.40 "Дефективный детектив". Комедийный сериал.

### БТВ - РТР

6.00 "Доброе утро, Россия!"
8.00 Вести.
8.10 "Местное время. Вести-Башкортостан".
8.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
8.45 "Утренняя почта".
9.20 "Субботник". В гостях у актрисы Елены Бирюковой.
10.00 "Вокруг света". Михаил Кожухов бродит по древнему Шибаму.
11.00 Вести.
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан".
11.20 "Сто к одному". Телеигра.
12.15 "Комната смеха".
13.15 "Клуб сенаторов".
14.00 "Ночное происшествие". Детектив. СССР, 1980 г.
14.20 "В стреляющей глуши". Приключенческий фильм. СССР, 1986 г.
16.00 "Деловой форум".
16.30 "Дела и люди".
16.50 "Сатраш".
17.20 "Местное время. Вести - Башкортостан". События недели.
18.00 Музыкальный конкурс "Секрет успеха". Второй национальный конкурс музыкальных исполнителей.
19.00 Вести. Дежурная часть".
19.30 "Честный детектив". Авторская программа Эдуарда Петрова.
20.00 Вести.
20.20 "Субботний вечер".
22.15 "Пушкин. Последняя дуэль". Драма. Россия, 2006 г.
00.25 "Хрупкая". Триллер. Испания, 2005 г.
02.30 "Жизнь как дом". Трагикомедия. США, 2001 г.
05.00 Канал EuroNews на русском языке.

### БСТ

**8.00 Новости (на русск. яз.)**
**8.05 "Доброе утро!" Концерт.**
**8.55 Погода.**
**9.00 "Барби и дракон". Мультфильм.**
**10.20 "Доверься сердцу своему". На сцене - молодые композиторы.**
**11.30 "Страницы вечности листая вновь...". Концерт.**
**13.30 "Теплый дом".**
**14.00 Новости (на башк. яз.).**
**14.20 "Телекомпас".**
**14.50 "Сулпылар".**
**15.05 "Деревянные человечки". Мультсериал.**
**15.30 "Дарю песню".**
**16.25 "Если луны зажигают...". Башкирские художники в Турции.**
**17.00 Чемпионат России по волейболу "Нефтяник Башкортостана" (Уфа) - "Искра" (Одинцово).**
**19.00 Новости (на башк. яз.).**
**19.20 "Дарю песню!"**
**20.30 "Сэнгелдэк".**
**20.45 "Родные напевы". Музыкально-развлекательная программа.**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "На сон грядущий". Интерактивная программа.**
**22.40 "Машина времени". Приключения.**
**По окончании: погода.**

### НТВ-4 (Орбита)

5.05 "Шпионские игры. Месть". 2 серии. Боевик. Россия, 2006 г.
6.45 "Приключения пингвиненка Лоло". Мультфильм.
7.30 "Сказки Баженова".
8.00 Сегодня.
8.15 "Золотой ключ". Телелотерея.
8.45 "Без рецепта".
9.20 "Смотр".
10.00 Сегодня.
10.20 "Главная дорога".
10.55 "Кулинарный поединок". "Восточный Новый год".
11.55 "Квартирный вопрос".
13.00 Сегодня.
13.20 "Особо опасен!"
14.00 "Время желаний". Мелодрама. СССР, 1984 г.
16.00 Сегодня.
16.25 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной. Героиня программы - актриса Анна Большова.
17.00 "Своя игра". Телеигра.
17.55 "Адвокат". "Эпидемия". Детективный сериал. Россия, 2005 г.
19.00 Сегодня.
19.40 "Профессия - репортер".
20.05 "Программа максимум".
21.00 "Русские сенсации". Информационный детектив.
22.00 "Реальная политика" с Глебом Павловским.
22.40 "На расстоянии удара". Триллер. США, 1993 г.
00.40 "Микс-файт М-1. Бои без правил".
01.10 "Воскресенье в Нью-Йорке". Комедия. США, 1963 г.
03.00 "Не ссорьтесь, девочки". Мелодраматический сериал.
04.35 "Время желаний". Мелодрама. СССР, 1984 г.

## ВОСКРЕСЕНЬЕ, 11 ФЕВРАЛЯ

### Первый канал

5.40, 6.10 "Малыш-каратист 2". Приключения. США, 1986 г.
6.00 Новости.
7.50 "Служу Отчизне!"
8.30 "Дисней-клуб". "Дональд Дак представляет", "Ведьма".
9.20 "Умницы и умники".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым.
10.30 "Пока все дома".
11.20 "Воскресный "Ералаш".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Живой мир". "Планета Земля".
13.10 "Три мушкетера". Полнометражный мультфильм.
14.20 "Кумиры". Элина Быстрицкая.
15.00 "А поутру они проснулись". Комедия. Россия, 2003 г.
16.50 "Звезды в интересном положении".
18.00 "Времена".
19.00 "Женская логика". Детектив. Россия, 2006 г.
21.00 "Воскресное "Время".
21.50 "Готика". Триллер. США, 2003 г.
23.40 "Секс-символы".
00.50 Хоккей. Европейский тур. Сборная России - сборная Чехии. Трансляция из Швеции.
02.40 "Звено в преступлении". Детектив. США, 1973 г.
04.00 "Дефективный детектив". Комедийный сериал. США, 2004 г.

### БТВ - РТР

5.45 "Весна". Комедия. СССР, 1947 г.
7.30 "Студия "Здоровье".
8.00 Вести.
8.10 "Местное время. Вести - Башкортостан".
8.20 "Сельский час".
8.50 "Диалоги о животных".
9.20 "Джокер". Приключения. СССР, 1991 г.
11.00 Вести.
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан".
11.20 "Городок". Дайджест.
11.50 "Сам себе режиссер".
12.45 "Смехопанорама".
13.15 "Парламентский час".
14.00 Вести.
14.20 "Фитиль Һ 119".
15.10 "Капитанская дочка". Мультфильм. Премьера.
15.40 "Смеяться разрешается".
17.55 "Женская интуиция".2003 г.
20.00 "Вести недели".
21.00 "Специальный корреспондент".
21.25 "Женская интуиция-2". Мелодрама. Украина, 2005 г.
00.05 "Шоу начинается". Комедийный боевик. США, 2002 г.
02.00 "Гипноз". Триллер. Испания, 2004 г.
03.55 "Встреча выпускников". Остросюжетный сериал. США, 2005 г.

### БСТ

**8.00 Новости (на русск. яз.).**
**8.05 "Доброе утро!" Концерт.**
**8.40 Погода.**
**8.45 "Барби и 12 танцующих принцесс". Мультфильм.**
**10.05 "Встречи в подводном мире". Документальный экран.**
**10.30 "Бабушкин сундучок".**
**11.00 "Тэмле".**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Семэр".**
**12.00 "Байтус".**
**12.15 "Артылыш".**
**12.45 "Станция судеб". Ретро-концерт.**
**14.00 "Книжный дом".**
**14.20 "На стыке времен".**
**14.40 "Деревянные человечки". Мультсериал.**
**15.00 "Любовь и голуби". Мелодрама.**
**16.50 "Автограф".**
**17.30 "Дарю песню".**
**19.00 "Майдан".**
**19.55 "Модный сезон".**
**20.20 "Дела и люди".**
**20.40 "Новое кино".**
**21.00 "Мегаполис".**
**21.30 "Ватан. События недели".**
**22.10 Погода.**
**22.15 "На сон грядущий".**
**22.55 "ИГЛС". Акустический концерт группы.**
**По окончании: погода.**

### НТВ-4 (Орбита)

6.15 "На расстоянии удара". Триллер. США, 1993 г.
8.00 Сегодня.
8.15 "Русское лото". Телелотерея.
8.40 "Дикий мир". "Реликты".
9.15 "Их нравы". Германия, Тунис, Йемен.
10.00 Сегодня.
10.15 "Едим дома".
10.50 "Счастливый рейс" с Николаем Фоменко.
11.45 Top gear.
12.20 "Авиаторы".
13.00 Сегодня.
13.25 "Тридцатая глава".
14.00 "Воровка". Комедия. США, 1987 г.
16.00 Сегодня.
16.25 "Один день. Новая версия".
17.00 "Своя игра". Телеигра.
17.55 "Адвокат". "Роковое влечение". Детективный сериал.
19.00 Сегодня.
19.50 "Чистосердечное признание". Документальный детектив.
20.20 "Чрезвычайное происшествие". Обзор за неделю.
20.55 "Главный герой" с Антоном Хрековым.
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым.
23.10 "Pianomanія". Концерт Дмитрия Маликова.
00.50 "Адвокат". Детективный сериал.
02.30 "Воровка". Комедия. США, 1987 г.
04.05 "Не ссорьтесь, девочки". Мелодраматический сериал.
05.40 "Профессия - репортер".

## *ЙОНДОҘНАМӘ*

**ҠУҘЫ.** Тормошоғоҙҙағы ыңғай үҙәгерештәр үҙегеҙҙең нимәгә һәләтле булыуығыҙҙы һәм мөмкинлектәрегеҙҙе дөрөҫ күрһәтә белеүгә бәйле буласаҡ. Ялҡаулыҡҡа юл ҡуймаһағыҙ, шаршамбынан башлап эштәрегеҙ һеҙ теләгәнсә барыр.

**БУҒА.** Был аҙнала һеҙ аралашҡан кешеләр яңы идеялар тәҡдим итер, яңы перспективалар асыр. Аҙна бик уңышлы булырға оҡшаған, шуға ла дүшәмбе яңы башланғысығыҙҙы нисек тә булһа бойомға ашырырға ынтылыу фарыз.

**ИГЕҘӘКТӘР.** Тормошоғоҙҙоң аҡ һыҙаты башланырға тора. Эшегеҙҙә һәм шәхси тормошта ыңғай үҙгәрештәр көтә.

**ҠЫҪАЛА.** Эргә-тирәләгеләрҙе ышандырырлыҡ итеп һөйләй белеүегеҙ яңы танышлыҡтар булдырырға ярҙам итәсәк. Ымһындырырлыҡ тәҡдимдәр араһынан тик лайыҡлыһын ғына һайларға тырышығыҙ.

**АРЫҪЛАН.** Сетерекле хәлдәрҙән һаҡ булыу ҡамасауламаҫ. Өйөгөҙҙө тәртипкә килтереү, кешеләргә изгелек күрһәтеү, белемде тәрәнәйтеү кеүек эштәр һаулығығыҙға ыңғай йоғонто яһар.

# Бәхәскә инмә

## 3 - 9 февраль

**ҠЫҘ.** Иғтибарҙы иң мөһим эштәргә генә йүнәлтегеҙ. Фекерегеҙҙе яҡлағанда бары үҙ көсөгөҙгә генә ышанығыҙ. Шишәмбе ыҙғыштан ситтәрәк тороу хәйерлерәк.

**ҮЛСӘҮ.** Ниндәйҙер эшкә тотонор алдынан уйлап, алдан план ҡороп алыу яҡшы булыр. Шулай иткәндә, уңыш һеҙҙән ситләшмәҫ. Ошо арала ял итеп алыу ҙа ҡамасауламаҫ.

**САЯН.** Шишәмбе элек сер булып ҡалған мөһим мәғлүмәткә юлығырһығыҙ. Был мәғлүмәтте үҙ маҡсатығыҙҙы тормошҡа ашырғанда ҡулланырға кәрәк буласаҡ.

**УҠСЫ**. Көсөгөҙҙө ваҡ-төйәк мәшәҡәттәргә сарыф итмәгеҙ. Аҙна яңы эшкә тотоноу йәһәтенән уңышлы булмаҡсы. Шишәмбе хеҙмәттәштәрегеҙ менән аралашҡанда һағыраҡ булырға кәңәш ителә.

**КӘЗӘМӨГӨҘ.** Кейем-һалым һатып алыу өсөн уңышлы аҙна. Шишәмбе күңелегеҙ тартмаған осрашыуҙан баш тартырға ла мөмкин. Эшлекле партнерҙарҙың ышаныслымы-юҡмы икәнлеген һынап ҡарау ҙа файҙаға булыр.

**ҺЫУҒОЯР.** Һеҙгә "ергә төшөү" мәле етте. Ни тиклем ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ булһағыҙ, хыялдарығыҙ ҙа шул тиклем тиҙерәк бойомға ашыр. Кемдеңдер һеҙҙең турала насар әйтеп ҡуйыуынан ҡурҡҡансы, үҙегеҙ теләгәнсә эшегеҙҙе дауам итеү яҡшыраҡ. Дүшәмбе бәхәскә инмәгеҙ.

**БАЛЫҠ.** Эш урынығыҙҙа уңыш көтә. Үҙегеҙҙе ҡулда тоторға һәм тирә-йүндәгеләрҙең кәңәштәренә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Аҙнаның икенсе яртыһын эшлекле кешеләр менән танышыу йәки мөнәсәбәт урынлаштырыуға арнарға мөмкин.

**("ИНТЕРНЕТ"тан).**

**Әйткәндәй...**

**Дин әһелдәре кәңәшенә ҡолаҡ һалып, яңы йылдан йондоҙнамә биреүҙе туҡтатҡайныҡ. Мөхәммәт бәйғәмбәр хәҙистәрендә шулай тиелә:"Минән һуң өммәтемдә буласаҡ өс төрлө хәлдән ҡурҡам: етәкселәрҙең ғәҙелһеҙлек күрһәтеүенән, йондоҙҙар менән күрәҙәлек итеүгә ышаныуҙан һәм тәҡдирҙе ялғанға сығарыуҙан". Ысынлап та, күрәҙәлек итеү Ислам дине буйынса гонаһ һанала. Әле бына ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙ ныҡышыуы буйынса йондоҙнамә баҫтырыуҙы тағы яңырттыҡ. Ғөмүмән, кәрәкме ул һеҙгә? Фекерегеҙҙе белдерһәгеҙ ине.**

✓ ***Әгәр һинең дә, минең дә берәр алма бар һәм беҙ ул алмалар менән алмашабыҙ икән, һәр беребеҙҙә берәр алма ҡала. Әгәр ҙә һиндә бер идея, миндә бер идея бар һәм беҙ улар менән алмашабыҙ икән, икебеҙҙә лә икешәр идея ҡала.***



*БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!*

# Миңлеғәфүр хыялы

**(Дауамы. Башы 11-се биттә).**

**Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы һәм 1998 йылда ҡумыҙсыларҙың Австрияла үткәрелгән III халыҡ-ара, Йомабай Иҫәнбаев һәм Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге ҡумыҙсылар конкурстары лауреаты Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың исеме күптән инде ҡумыҙ сәнғәте менән ауаздаш. Ошо боронғо музыка ҡоралын тәү башлап ҡулына алған мәлдәрҙән үк үҙен ҡумыҙ сыңы аша башҡорт халҡының "Порт Артур", "Байыҡ", "Перовский", "Циолковский", "Дала" һәм башҡа бик күп классик йырҙарының көй тәрәнлеген үҙенә генә хас зауыҡ, нескәлек менән аса алған, тамашасыларҙы әсир иткән виртуоз ҡумыҙсы итеп танытты. Оҫта ҡурайсы, ҡумыҙсы ғына түгел, ә ошо боронғо музыка ҡоралына уйнау серҙәрен йәш быуынға тапшырыу эшендә ҙур энтузиазм менән ал-ял белмәй эшләгән музыкант-мәғрифәтсе лә. Республикала ул сығыш яһамаған мәктәп, укыу йорттары, мәҙәниәт усактары юк тиерлек. Музыкант-мәғрифәтсе булараҡ, ул шәхестең милли үҙаңын үятып, асылына ҡайтара белеү, рухын үҫтереү һәләтенә эйә булыуы менән дә халыкта тәрән ихтирам, һөйөү яуланы. Ә был тиҙҙән үткәреләсәк конкурс Миңлеғәфүрҙең күптәнге хыялы ине. Шуға ла беҙ уға фекерҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.**



**▶▶ Миңлеғәфүр, был конкурстың тәүге тапҡыр үткәрелеүе үҙе үк тарихи ваҡиға булаҡ. Республика кимәлендәге ярышта ҡатнашырлыҡ ҡумыҙсылар бармы?**

- Әлбиттә, бар. Был турала һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел, сөнки ҡумыҙсыларҙың иҫәбе-һаны юк һәм ошоғаса улар өсөн айырым конкурс ойошторолманы, йәғни ҡумыҙсылар тәрлә конкурстарҙа бүтән музыка ҡоралдарына ҡушылып сығыш яһау менән генә сикләнде. Шуның өсөн ҡумыҙ һәм өҙләү жанры оҫталарының айырым конкурсын үткәреү кәрәклеге күптән өлгөргән мәсьәлә ине.

**▶▶ Конкурстың төп маҡсаты ниҙә?**

- Ҡумыҙ сиртеүселәр күп беҙҙә, ә ошо музыка ҡоралында көй башҡара белеүселәр юк тиерлек, йәғни был жанрҙа үҫеш ҡумыҙ тауышын сығарыу кимәлендә генә ҡала килә. Ә бит уның мөмкинлектәре киң. Ҡумыҙ сыңы аша дәртле бейеү көйҙәрен генә түгел, ә оҙон көйлә йырҙарҙың ҡабатланмаҫ аһәңен дә сағылдырып була. Шуның өсөн конкурс ҡумыҙсыларҙың көйҙә боҙмайынса, еренә еткереп башкарыу һәләтен асыклау, белмәгәндәргә өйрәтеү, тәжрибә уртаклашыу, ҡумыҙ сәнғәтен артабан үҫтереү маҡсатында үткәрелә лә инде. Халыкта алтын бәрәбәренә тиң таланттар күп, мин уларҙың барыһын да сәхнәгә сығарғым килә.

**▶▶ Яңылышмаһам, тыуған районың Мәсетлелә ҡумыҙсылар конкурсы үткәреү күптәнге хыялың ине. Ни өсөн тап ошо тарафтарға йыймаҡсыһығыҙ?**

-Эйе, был минең күптәнге хыял ине, шуға район үҙәге Оло Ыҡтамакта ҡумыҙсы һәм өҙләүселәр конкурсын үткәреүҙе ҡыуанып ҡабул иттем. Был яҡтарҙа әүәлдән ҡумыҙ сәнғәте һаҡланып килә. Бала сакта һәүәҫкәр артистар концертында йәштәрҙең дә, оло йәштәге әбейҙәрҙең дә ағас ҡумыҙҙа матур көйҙәр уйнауы әле лә ҡолакта сыңлай һымак. Икенсенән, Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә киң билдәле ҡумыҙсы Роберт ағай Заһретдинов та Мәсетле районында тыуып үҫкән. Был үҙе үк конкурстың беҙҙең районда уҙғарылырға тейешлегенә ишара түгелме ни?

**▶▶ Башҡортостандан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ вәкилдәренән конкурсанттар көтөләме?**

- Килерҙәр тип өмөтләнәбеҙ. Республиканан ситтә йәшәгән башҡорттар ҡумыҙ сиртеүгә айырыуса әүәҫ, дәртле булыуы менән ҡыуандыра. Уларға был боронғо музыка ҡоралының килеп сығыу тарихын ғына һөйләү фарыҙ, бик ихлас өйрәнәләр, сөнки ҡумыҙға тартылыу, уға тиҙ генә ылығыу халыҡтың ҡанында һаҡланған.

**Миңниса СӘФӘРҒӘЛИНА әҙерләне.**

## Тултырылған тауыҡ




**Уның өсөн уртаса ҙурлыктағы бер тауыҡ, алты йомортка, ярты стакан һөт, 100 грамм аҡ май, бер стакан ҡойка тертелдәге, 750 грамм һеҙөлгән һурпа һәм тоҙ алығыҙ. Йомортканы иретелгән аҡ май менән һөткә туғып, омлет әҙерләгеҙ.**

Тауыкты эсле-тышлы яҡшылап таҙарткас, йыртмай ғына тиреһен һыҙырырға ла, муйынынан баяғы омлетты эсенә ҡойоп, тегеп ҡуйырға. Аҙаҡ тултырылған тушкәне марляға төрөп, ҡайнар һыуға һалғас, бешкәнсе талғын утта ҡайнатырға кәрәк. Бешеп сыккас, һыуытырға ҡуйығыҙ, һыуынғас, тултырылған "тауыкты" өлөштәргә телеп, тәрилкәгә һалғас, өҫтөн вак киҫәктәргә теленгән помидор, лимон, петрушка һәм нык бешкән йомортканан эшләнгән ромашка сәскәһе менән биҙәп, баяғы һурпаға һалып, бер аҙ ҡайнатып, һыуытылған ҡойка тертелдәгән ҡойоп ултырта бирергә лә, телеп ашарлык булғас, табынға ҡуйырға.

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. ҒАФУРИ ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ АКАДЕМИЯ ДРАМА ТЕАТРЫ

16 февралдә СССР-ҙың халык артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Гөлли Мөбәрәкова юбилей кисәһенә саҡыра.

Февралдә шулай уҡ "Урал батыр", "Һуңғы Ғәйнә", "Яралы яҙмыш", "Ҡәкүк ояһы", "Нәркәс" спектаклдәрен, "Ҡоҙаса", "Мәһәрә - байҙан", "Башмағым", "Ҡатынымдың исеме Морис", "Аты барҙың - дәрте бар" комедияларын ҡарарға мөмкин.

Белешмәләр өсөн телефон: **272-35-33, 273-81-27, 273-80-36 (факс).**

### БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ФИЛАРМОНИЯҺЫ

**3 февралдә** Башҡортостандың халык артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Миңлеәхмәт Фәйнетдинов** дуҫтарын йыя.

**4 февралдә** Халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты **Сәйҙә Ильясова** йырлай.

10 февралдә Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халык артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Флүрә Килдейәрованың** бенефисы.

Концерттар 19.00 сәғәттә башлана.

Белешмәләр өсөн телефон: **250-77-42, 250-63-50.**

## *АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Хәҡиҡәтһеҙ ерҙә...
## уйҙырма тыуа

✎Бары тик иң аҡыллылар һәм иң ахмаҡтар ғына үҙгәрмәй.

**(Конфуций).**

✎Кеше хаталанырға мөмкин. Хатаһын таныу уны күркәм итә. Ә инде хатаһын төҙәтһә, ул ике тапкыр күркәм буласаҡ.

**(Алишер Навои).**

✎Һәр кем үҙ яурыны күтәрә алырҙай ғына йөк йөкмәргә тейеш, шулай түгел икән, ул йөҙә менән бысракка йығыласаҡ.

**(Данте).**

✎Аҡыллымы һин, ахмаҡмы, бөйөкмө һин, бәләкәйме, - һин ниндәйҙер һүҙ әйтмәйенсә, беҙ быны белә алмайбыҙ.

**(Саади).**

✎Хәҡиҡәтте икәү әйтә: кем һөйләй һәм кем тыңлай.

**(Көнсығыш аҡылы).**

✎Тәбиғәт бушлыкты яратмай: хәҡикәтте белмәгән кешеләр бушлыкты уйҙырмалар менән тултыра.

**(Бернард Шоу).**

✎Әгәр һинең дә, минең дә берәр алма бар һәм беҙ ул алмалар менән алмашабыҙ икән, һәр беребеҙҙә берәр алма ҡала. Әгәр ҙә һиндә бер идея, миндә бер идея бар һәм беҙ шул идеялар менән алмашабыҙ икән, ул сакта икебеҙҙә лә икешәр идея ҡала.

**(Бернард Шоу).**

✎Интеллигент булып ҡыланып булмай.

**(Д. Лихачев, академик).**

✎Бер ваҡытта ла: "Һеҙ мине аңламанығыҙмы?" - тип һорама, "Мин һеҙгә аңлата алдыммы?" - тип һора.

**(М. Робер).**

✎Сит кешеләрҙең фекерен ҡабул итеү өсөн үҙеңдең фекерең булмаҫҡа тейеш.

**(Л. Толстой).**

✎Яҡшы "ҡоралланған" кеше генә яҡшы йоҡлай торғандыр.

**(Блез Паскаль).**

✎Тәнкит хат ташыусы күгәрсен һымак: ул һәр ваҡыт яңынан үҙенә әйләнеп ҡайта

**(Дейл Карнеги).**

✎Барыһын да аңларға була, тик үҙ-үҙеңде түгел.

**(Стендаль).**

✎Кеше ни тиклем аҡыллы һәм изгелекле булһа, башҡаларҙа ла изгелекте шәйләй белә.

**(Ф. Честерфильд).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Бер ҡыҙҙан: "Иң мөһим кеше кем? Иң мөһим ваҡыт ҡасан? Иң кәрәкле эш ниндәй?" тип һорағандар. Ҡыҙыҡай: "Иң мөһим кеше - әлеге аралашҡаны. Иң мөһим ваҡыт - әлеге мәлдә йәшәгәне. Иң кәрәкле эш - һәр ваҡыт эргәндә булған кешегә изгелек эшләү", - тип яуаплаған".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәррирәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru

«Киске Өфө»нең индексы – 50665.

«Киске Өфө»нең реклама хеҙмәте, **53-25-44, 72-89-09, 73-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды, (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6029
Заказ 494